ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 февраль (шаҡай) 2021

№8 (946)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

"Дөм ҡараңғы төн. Ҡайҙандыр тауҙар яғынан ҡурай моңо ағыла. Көтөү көткән тау башҡорттары, төндә усаҡ янына йыйылышып, ҡурай тарта. Уларҙың "Сәлимәкәй" тигән тәрән хисле көйөн, әйтерһең, йылғалар, тауҙар, урмандар, Ер үҙе йырлай... Тау үҙәндәре буйлап әллә нисәмә саҡрымдарға тиклем таралған ҡурай моңо төнгө тынлыҡта тағы ла йомшағыраҡ, наҙлыраҡ яңғырай. Ә мин ниндәйҙер илһамлыҡ сағылған был матур көйҙө йотлоғоп тыңлайым да тыңлайым..." Л.Н. ЛЕБЕДИНСКИЙ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Әрмеләргә барһаң...**
бабайланма!



6

**Атайым тимерлегендәге тимер-томор...**
минең спортсы ҡомарымды уятты



8-9

**Белемле булыу отошлораҡ,**
ти гимназия-интернат уҡыусылары



10

**Шамониндар еңеүгә ынтыла!**



12-13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Егерме өсөнсө февраль һеҙҙең өсөн ниндәй байрам һәм уны нисек билдәләйһегеҙ?

***Ринат ЙӘҒӘФӘРОВ, Ейәнсура районы:*** 23 февраль, йәғни Ватанды һаҡлаусылар көнө - минең өсөн бик иҫтәлекле көн. Мин үҙем дә армияла хеҙмәт иттем, туғандарым, дуҫтарым араһында ла кирза итектә йөрөгәндәр, ялан кухняһында бешкән бутҡа тәмләп ҡараусылар күп. Яҡшы тормош мәктәбе булды ул армия. Ир һүҙе бер булыуын, ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙгә яуап тоторға кәрәклеген, сит ерҙә ярҙамсыллыҡ, йомартлыҡ, тәүәккәллек иң мөһим сифаттар икәнен раҫлаған, ғүмерлек һабаҡ булырлыҡ ваҡиғалар күп булды. Тыуған ауылымдың, яҡын кешеләремдең ҡәҙерен дә тик меңәрләгән саҡрым йыраҡлыҡта булғанда ғына аңланым. Шуға ла был дәүләт байрамына айырыуса иғтибар бирәм.

Ике улым да армияға барыу яҡлы, шуныһы ҡыуаныслы. Өҫтәүенә, минең хәләл ефетемдең дә хәрби билеты бар, ул - запастағы кесе сержант. Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡығанда ике йыл медицина әҙерлеге үткәс, уға ла билет биргәндәр. Ул да үҙен хәрби бурыслы итеп тоя. Шуға күрә был байрамға етди әһәмиәт бирәбеҙ. Төрлө йылда төрлөсә байрам итәбеҙ. Быйыл балаларҙы алып, Сибайға, бергә хеҙмәт иткән иптәшемә барырға планлаштырабыҙ. Тәмле-тәмле ризыҡ бешереп, ғаилә менән көнө буйы телевизорҙан илһөйәрлек темаһына арналған фильмдар ҡарап ҡына ла ултырғаныбыҙ бар. Был көндө Бөйөк Ватан һәм локаль һуғышында ҡатнашҡан туғандарыбыҙҙы, олатай-ҡартатайҙарыбыҙҙы иҫкә алабыҙ, иҫәндәрен телефондан ҡотлайым. Шинель кейәсәк, хәрби ант бирәсәк кесе ир туғандарыбыҙҙы ла иғтибарһыҙ ҡалдырмайым, сөнки уларҙың һәр береһендә Тыуған иленең, яҡындарының һаҡсыһын һәм яҡлаусыһын күрәм.

Ватанды һаҡлаусылар көнө атай-олатайҙарымдың элек-электән илгә тоғро хеҙмәт итеүҙәренең тарихи дәлиле булыуы менән дә ҡәҙерле. Мин Рәсәйҙең именлеген һәм тыныслығын һаҡлаған, уның хәүефһеҙлеген тәьмин иткән армиябыҙ менән һәр саҡ ғорурландым һәм ғорурланасаҡмын. Форсаттан файҙаланып, гәзит уҡыусылар араһындағы Ҡораллы көстәр яугирҙарын, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын, һалдаттарҙы һәм запастағы офицерҙарҙы матур байрам менән ҡайнар ҡотлайым! Уларға ныҡлы һаулыҡ һәм именлек, тыныслыҡ, эштәрендә ҙур уңыштар теләйем!

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ХАЛҠЫМ ТЕЛЕ МИҢӘ - ХАҠЛЫҠ ТЕЛЕ




Рәми ҒАРИПОВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

## ТУҒАН ТЕЛ

*Мин халҡымдың сәскә күңеленән*
*Бал ҡортондай ынйы йыямын,*
*Йыямын да, йәнле ынйыларҙан*
*Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.*
*Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:*
*Бер телдән дә телем кәм түгел -*
*Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,*
*Кәм күрер тик уны кәм күңел!*
*Халҡым теле миңә - хаҡлыҡ теле,*
*Унан башҡа минең илем юҡ;*
*Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,*
*Иле юҡтың ғына теле юҡ!*
*Әсәм теле миңә - сәсән теле,*
*Унан башҡа минең халҡым юҡ,*
*Йөрәгендә халҡы булмағандың*
*Кеше булырға ла хаҡы юҡ!*

Фәнил БҮЛӘКОВ

## АЛТЫНДАРҒА БИРМӘҪ ХАЗИНА

*Йәнем моңо минең - башҡорт теле,*
*Рухым сәңгелдәге һин, телем!*
*Тик тиңләшер затлы хазинама -*
*Тыуған ерем, әсәм һәм илем.*

*Тәүге тындан һуңғы һулышҡаса*
*Иркәләр тик ғәзиз телгенәм.*
*Үҙ теленән күпһенгәндәр генә*
*Бер йәнемде меңгә телгеләй.*

*Тормошома изге ҡотто биргән,*
*Ҡотло иткән беҙҙең ғүмерҙе,*
*Туған телем әсә һөтө кеүек*
*Һәр сабыйға шундай ҡәҙерле.*

*Туған телем - әсә һөтө үҙе,*
*Милләтемдең рухы, моң, ҡото.*
*Күңелдәрҙе беҙҙең туған иткән,*
*Милләт иткән телем башҡортто.*

*Айырмайыҡ бары сабыйҙарҙы*
*Ата-бабам биргән ырыҫтан.*
*Онотмайыҡ оло хәҡиҡәтте -*
*Тыумаған бит балаң урыҫтан.*

*Башҡорт теле - нурлы Уралымда*
*Алтындарға бирмәҫ хазина.*
*Халҡым рухын сағылдырып күктә*
*Сая бөркөттәре ҡағына.*

Салауат ӘБҮЗӘР

## МИНЕҢ ТЕЛЕМ

*Таш быуаттан килә минең телем,*
*Мәмерйәлә тыуған тәүге өнө.*
*Һөңгө сыңы ишетелә унда,*
*Һеңеп ҡалған уға ут төтөнө.*

*Яңғыраған ул йыртҡыс аулағанда,*
*Йәйәләрҙән осҡан уҡ булып.*
*Тиртеп сыҡҡан бейә елененән,*
*Сәскәләрҙән тамған һут булып.*

*Ҡылыс булып ҡындан һурылған ул*
*Яу килгәндә тыуған еремә.*
*Ул ағылған ҡурай моңо булып,*
*Күтәрелеп Урал үренә.*

*Үртәгәндәр уны һәм аҫҡандар...*
*Меңәрләгән ауыл көлөнән.*
*Ул терелеп ҡабат атылып сыҡҡан*
*Бишектәге сабый теленән.*

*Ата-бабаларҙың аманаты,*
*Тере рухы - башҡорт теле ул.*
*Халҡыбыҙҙың аҫыл*
*хазинаһы, Милләтемдең*
*изге түле ул!*

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МАТУР МӘҒЛҮМӘТТЕ...
## гәзиттәрҙән алайыҡ



**Бөгөнгө заманда мәғлүмәткә ҡытлыҡ юҡ. Йөҙләгән каналлы телевидение, гәзит-журналдарҙан тыш, интернет аша йәнең теләгәнде алырға мөмкин хәҙер. Әйткәндәй, гаджеттар, смартфондар, социаль селтәрҙәр мәғлүмәт биреү йәһәтенән генә түгел, ә кешенең бөтә ихтыяжын тиерлек ҡәнәғәтләндерә бөгөн. Ер сигенән тауар ҙа һатып ала, диванда тормай ғына аҡсаһын да күсерә, документтар ҙа йыя, уҡый ҙа, эшләй ҙә, тигәндәй. Дуҫтар менән аралашыу, туғандар менән йылы мөнәсәбәт булдырыу хаҡындағы уй хәҙер икенсе, хатта унан да һуңыраҡ планға күсте. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын, тигән әйтем дә хәҙер актуаллеген юғалтҡандай, сөнки хәҙер бәндә үҙенең дуҫы тип "Бәйләнештә", "Класташтар", "Фейсбук", "Инстаграм"дағы виртуаль дуҫтарын иҫәпләй.**

Пандемияға бәйле үҙкурсаланыуҙа булғанда мин дә интернет киңлеген иңләргә өйрәнеп алдым. Балалар, дуҫтар менән ватсаптан видеошылтыратыу аша ғына һөйләштек. Күптән теркәлгән булһам да, форсат сыҡмай тора ине, "Класташтар" социаль селтәрен дә үҙләштерҙем. Элекке таныштарҙы, дуҫтарҙы эҙләп, көнө буйы ноутбук артында ултырған ваҡыттар ҙа булды. Ҡул эше лә онотолдо, хатта ашағанда ла монитор артында ултырҙым.

Тәүҙә бик ҡыҙыҡ тойолдо. Ҡайһы берәүҙәр бар тормошон интернетҡа һала икән. Нимә бешергән, ашаған, эшләгән, планлаштырған - барыһын да белергә була унда. Бөгөнгө көнөл торошо, кәйефе тураһында ла постар яҙып һалалар. Йәшермәйем, башта бик мауыҡтырғыс ине, дуҫтарым араһында булған бер таныш булмаған кешеләргә үҙем дә комментарий, фекерҙәр, тәҡдимдәр яҙырға йыбанманым...

Тик тиҙ ялҡтым. Беҙҙең башҡорт халҡында барыбер ниндәйҙер әҙәп-әхлаҡ нормаларына ингән тыйыуҙар, сикләүҙәр бар бит. Кеше артынан һөйләү бөтөнләй тыйыла. Әйтергә кәрәк, урында ла, ямандың исемен әйтмәй генә һөйләү йәки ситләтеп, кинәйәләп әйтеү хуплана. Ә бында... Кемде генә тикшермәйҙәр ҙә, кемде генә һөйләмәйҙәр. Килешкән эш түгел ул үҙеңдең фекереңде, мөнәсәбәтеңде башҡаларға көсләп тағыу, кешеләрҙе кәмселеген, ҡасандыр ҡылған ҡылығын иҫкә алыу. Был тормошта беребеҙ ҙә гөнаһһыҙ түгел. Һәр беребеҙҙең йә белеп, йә белмәй эшләгән хаталы аҙымыбыҙ, яңылышлығыбыҙ, гөнаһыбыҙ бар. Кешенең йығылғанын түгел, ә йығылғандан һуң күтәрелгәнен күрергә өйрәнәйек, йәмәғәт.

Шуларҙан һығымта яһаным да, социаль селтәрҙәргә инмәҫкә булдым. Иң яҡшы мәғлүмәтте, элеккесә, гәзит-журналдарҙан алам хәҙер. Унда яҙыусыларыбыҙ ҙа, шағирҙарыбыҙ ҙа, башҡа күренекле шәхестәр ҙә беҙ тыңләүҙәрҙе тейешле итеп яҙыла. Был йәһәттән "Киске Өфө" гәзитен миҫалға килтергем килә. Ундағы материалдарҙың барыһы ла кешене тәрбиәләй. Фекерләүгә, уйға ҡоролған. Тормошобоҙҙоң бөтә өлкәһенә ҡағылған мәҡәләләр урын ала унда. Уныш ҡаҙанырға ла, үҙеңде нисек тоторға ла, кейенергә лә өйрәтә ул. Етешһеҙлектәрҙе лупа аша күрһәтеп, матур ваҡиғаларҙы кесерәйтеп тә бирмәй. Тормошто нисек бар, шулай яҡтырта. Шуның өсөн алдырайыҡ һәм уҡыйыҡ уны.

**Гүзәл КӘРИМОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Егерме өсөнсө февраль һеҙҙең өсөн ниндәй байрам һәм уны нисек билдәләйһегеҙ?*

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Көйөргәҙе районы Йомағужа ауылы:*** Беҙ йәш саҡта 23 февралдәге байрамдың исеме башҡасараҡ ине, йәғни тарихи дөрөҫләккә яҡыныраҡ тура килә торғайны, сөнки уның менән әрме сафында булғандарҙы ғына ҡотлай торғайнылар. Хәҙер һалдат һурпаһын тәмләп ҡарамаған депутаттар уны Ватан һаҡлаусылар көнө итеп ҡалдырҙы. Бөгөн был датаны погон тағып йөрөгәндәрҙең, енесенә ҡарамай, бөтәһе лә байрам итә. Һәм, минеңсә, был факт уның баһаһын бермә-бер төшөрә.

Байрам датаһы нигеҙе итеп 1918 йылдың 23 февралендәге Нарва янындағы алыш алынһа ла, ватандаштар элек-электән Рәсәй дәүләте алып барған бихисап һуғыштарҙа ҡатнашып, үҙен мәңгелек данға күмгән. Халҡымдың тарихҡа "Төньяҡ амурҙары" исеме менән инеп ҡалыуы ғына ни тора! Был исем француздарҙың аңына беҙҙекенә ҡарағанда ла нығыраҡ ултырған кеүек. Мәктәптә уҡығанда башҡорт теле уҡытыусыһы шундай бер хәлде һөйләгәйне. Полиглотҡарҙың халыҡ-ара симпозиумында бер билдәле француз телдәр белгесе Жәлил Кейекбаевты күреп ҡала. Кем икәнен, милләтен һораша. "Төньяҡ амурҙары"нан ниндәй полиглот сыҡһын, тип аптырап, милләттәшебеҙ янына килеп французса өндәшә. Яҡташыбыҙ икенсе телдә яуап бирә. Төрлө телдәрҙә һүҙ көрәштерә торғас, француздың тел запасы бөтә. Аптыраған полиглотка "Быңа һинә "Төньяҡ амуры!" тиеүҙән башҡа сара ҡалмай. Наполеон яуынан быуат ярым йыл үтһә лә, 30-ҙан ашыу телдә иркен һөйләшкән ғалимыбыҙ француз ғалимынан бар халыҡ алдында был исемде яңынан әйттереүгә өлгәшә.

Беҙҙең бәләкәй генә ауылдан 1812-1814 йылдарҙағы һуғышта бик күптәр ҡатнаша, бишеүһе яу яланында ятып ҡала. Йомағужаларҙың алыштарҙа ҡыйыу, әүҙем эш алып барыуы хаҡында шундай факт һөйләй: дүрт ауылдашым есаул дәрәжәһенә барып етә. Хәҙер уларға капитан йә иһә майор тип өндәшерҙәр ине. Минә фамилия бирген олатайым Әмир Хәлитов та биш тапҡыр яртышар йыл Ырымбур хәрби сиген һаҡлау өсөн хәрби хеҙмәткә саҡырыла.

Уҙған быуат башында ла йомағужалар урыҫ-япон һуғышынан ситтә ҡалмай. Оло Ватанын һаҡлағанда дүртеһе яу яланынан ҡайтмай.

1917-1919 йылдарҙағы милли хәрәкәттә Башҡорт ғәскәрен ойоштороу иң мөһим ваҡиғаларҙың береһе булып тора. 1-се, 4-се полктар составында 19 ауылдашым ҡатнаша.

Бөйөк Ватан һуғышына киткән 71 яҡташымдың 38-е ил азатлығы өсөн башын һала. Беҙҙең заманда булған урындағы конфликттарҙа ла беҙҙекеләр ситтә ҡалмай. Азамат Әғзәмов Афғанстанда интернациональ бурысын үтәһә, Төньяҡ Кавказдағы хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан ауылдаштарым да бар. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Югославияның "Приштина" аэропортын һаҡлап торған батальондарҙы бер БТР-ҙың механик-водителе лә беҙҙең ауылдан. Курһәткән ҡыйыулығы өсөн "Батырлыҡ" ордены менән бүләкләнгән. Һанай китһәң, бөгөн дә иленде һаҡлап батырлыҡ күрһәтергә сәбәптәр етерлек.

Беҙ йәш саҡта әрме сафына бармай ҡалыу ҡыҙҙар тарафынан ҡурҡаҡлыҡ һанала ине, ә хәҙер ул батырлыҡҡа, йылғырлыҡҡа тиңләштерелә. Әрмегә бармаған ир кешене Ватанды һаҡлаусылар көнө менән ҡотлаһалар, миңә уны салбар кейеп йөрөгән өсөн генә тәбрик итәләр кеүек тойола. Ә инде ике йыл һалдат шинеле кейгән, һалдат бутҡаһы ашағандарҙы ихлас күңелдән тәбрикләйҙәр кеүек.

23 февраль көндө мин һалдат тормошон, хәҙер сит илгә әйләнгән республикаларҙа ҡалған хеҙмәттәштәремде иҫкә алам. Бигерәк тә Украинаның Львов өлкәһенән булғандарын. Уларҙын, минең менән бөтә нәмәне, хатта тәмәкене лә бүлешкән иптәштәремдең үҙ илдәрендә төндә факел тотоп йөрөүҙәрен күҙ алдына ла килтерә алмайым. Был дата - тарихи дата, шуға күрә байрамдың исеме үҙгәрһә лә, минең быуын, Совет Армияһында һәм Хәрби Диңгеҙ флотында хеҙмәт иткән ир-егет, уны элекке традицияларға ярашлы билдәләйҙер, хеҙмәттәштәрен хөрмәтләп иҫкә алалыр, тип ышанам.

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# САМА БЕЛЕРГӘ...

**Әйтәһе һүҙем яңылыҡ түгел, ә шулай ҙа ҡайһы бер йәш әсәйҙәргә иҫкәртеү итеп әйткем килә: әсә теленә һөйөү балаң һинең ҡарыныңда саҡта уҡ һалына, һинең ягымлы, моңло, хәстәрлекле тауышың, иркә һүҙҙәрең уның күңеленә һеңешә. Яҡты донъяға тыуғандан һуң да ғаиләлә туған телдә аралашыуҙар ҡолағын иркәләһә, артабан балалар баҡсаһы ла, мәктәп тә, уратып алған мөхит тә сабый күңеленә һеңеп ҡалған әсә телен оноттора алмай...**

Шулай итеп, балаға әсә теленә һөйөүҙе әсәй бирә, ғаилә ағзалары уны ҡеүәтләй, байыта. Тимәк, телде яратыу, башҡорт телендә һөйләшеү - ул ғаилә тәрбиәһе емеше. Ә ни өсөн бала балалар баҡсаһында, артабан мәктәптә урыҫ һүҙҙәре ҡуллана башлай, урыҫса һөйләшергә ынтыла? Интернетҡа, ҡараған йәнһүрәттәргә, аралашҡан дуҫтарының йоғонтоһона һылтанабыҙ инде был осраҡта. Ә атай-әсәйҙең контроле, талабы ҡайҙа? Атай-әсәй сабый ғына сағынан бала күңеленә һәр нәмәлә сама белеүҙе һеңдерергә тейеш - йәнһүрәттәрҙе сәғәттәр буйына түгел, ә билдәле бер ваҡытта ғына ҡарарға өйрәтеү һәм талап итеү зарур. Әгәр ошо талап үтәлмәһә, бала мәктәптә лә телефонынан айырыла алмаясаҡ. Сама белергә өйрәтеү - балала ихтыяр көсө, үҙаң, үҙ-үҙен камиллаштырыу кеүек сифаттарҙы ла тәрбиәләү ул. Ҡартлыҡ осоронда бала тәрбиәһендәге үҙегеҙ ебәргән хаталар эҙемтәһенән ыҙа сикмәйем тиһәгеҙ, уға сәңгелдәктән алып балиғ булғанға тиклем тәрбиә һабаҡтары биреүҙе дауам итегеҙ, тип йөҙ тапҡыр ҡабатланған хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр йәш атай-әсәйҙәр иҫенә төшөрөп ҡуйыйым, тинем...

**Гүзәл МОНАСИПОВА,**
**Баймаҡ районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Юғары әҙерлек режимы тураһында" указға сираттағы төҙәтмәләр индерҙе. Атап әйткәндә, банктарҙа, сауҙа объекттарында һәм күп функциялы үҙәктәрҙә бирсәткә киймәҫкә мөмкин. 65 йәштән өлкән граждандар өсөн изоляция тәртибе 25 февралгә хәтлем һаҡлана. Шулай уҡ республика етәксеһе Башҡортостан балаларына "Орленок" һәм "Артек" лагерҙарына барырға рөхсәт бирҙе, ә чиновниктар кәңәшмәләрҙе видеобәйләнеш аша түгел, офлайн үткәрергә мөмкин.

✓Башҡортостанда һуңғы тәүлектә коронавирус йоҡтороуҙың 152, дауахананан тыш пневмонияның 179 осрағы расланған. Пандемия башланғандан алып республикала 27 146 сирле теркәлгән. Хәҙерге ваҡытта 264 пациент стационарҙа ята, уларҙың 16-һы - ауыр хәлдә, 5-һе үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Ә 5210 кеше өйҙә дауалана. Уҙған тәүлектә коронавирустан вафат булғандар һаны өсәүгә артты, бөтәһе - 241 кеше.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров рәсми рәүештә республиканың Туризм буйынса дәүләт комитетына яңы етәксе тәғәйенләнә. Хәҙер был вазифаны Свердловск өлкәһе Туризмды үҫтереү үҙәгенең элекке директоры Эльмира Туҡанова биләй. "Ул сығышы менән беҙҙең республиканан. Ейәнсура районы Таҙлар ауылында тыуған. Һуңынан Нижневартовскиға уҡырға киткән, Төмән өлкәһенең төрлө музей учреждениеларында эшләгән. Эльмира Наил ҡыҙының тәжрибәһе ҙур. Беҙ шундай кешене эҙләнек тә инде", - тине Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов "Арт-Ҡоролтай" төбәк мәҙәни форумы ойошторорға тәҡдим итте. Ул 25 мартта билдәләнгән Мәҙәниәт хеҙмәткәре көнө уңайынан үткәрелә. Мәҙәниәт министрлығы уҙған йылда уҡ ошо башланғыс менән сыҡҡайны, ләкин коронавирус пандемияһы үҙ төҙәтмәләрен индерҙе. Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, баш ҡала, шулай уҡ тотош республика халҡы байрамса мөхиттә тойорға тейеш. Форумды йыл һайын ойошторорға тәҡдим ителәр.

✓ *Ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә баш булырға, аҡсаны иренән күберәк эшләргә ынтыла. Быны менән үҙенә-үҙе ауырлыҡтар тыуҙырыуын, ҡапҡан ҡороуын да аңламай ул.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КИЛӘСӘГЕБЕҘ...

## яуаплылар ҡулында

***Гөлфирә АБДУЛЛИНА, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры:*** Бөгөнгө замандың төп бәләләренең береһе - кешенең үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға теләмәүе. Йәштәрҙең дә, оло быуын вәкилдәренең дә "Миңә теймәһәләр - шул еткән" тигән принципты өҫтөн ҡуйып, ҡалыплашып китеүе тәрән хафаға һала. Яҡты киләсәккә табан ынтылыу хыялдары селпәрәмә килеүҙәнме икән был, әллә "өйөр инстинкты" өҫтөнлөк алғанмы, аңламаҫһың. Һәр хәлдә, йәштәр менән көн дә аралашҡан кеше булараҡ, уларҙың бер-береһе артына йәшеренергә тырышыуы, ҡушылған йомошто башҡалар өҫтөнә ауҙарырға әҙер тороуы кеүек кире күренештәргә ирекһеҙҙән шаһит булам. Яуаплылыҡтан баш тартыу битарафлыҡҡа, үҙ көсөнә ышанмауға һәм башҡаларҙы ауыр хәлгә ҡуйыуға килтерә. Уларҙың бар булған ғына лидерлыҡ һәләттәре баҫылып, бөтөнләй юғалып ҡалыуы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Ә был рәүешле "Ваҡыт уҙһын - сабата туҙһын" тип йәшәй биргән ғүмерҙең ни ҡиммәте бар һуң? Мәктәптә алдағы парта артында ултырған иптәшенең арҡаһына йышыкланып, артабан студент эскәмйәһендә лә "минән генә һорамаһалар ярар ине, миңә генә ҡушмаһалар ярар ине был эште" тип ултырыусылар ологайғас та ошо ҡылыҡтарын дауам итмәҫ, тип кем әйтер? Урыстың "Моя хата - с краю" тигән әйтемендәгесә, яуаплылыҡты башҡаларға өйөп, еңел генә көн итеүселәр күбәйеп китте бит бөгөн. Башҡаларҙың тир түгеп, һаулыҡтарын бөтөрөп эшләгән хеҙмәтен тартынмайынса кире баһалаусылар, тәнҡит утына тотоусылар ҙа күпселек осраҡта тап иңенә яуаплылыҡ алырға теләмәүселәр араһынан сыға ул. Уларға бөтән кеше эшләгәндәрҙең береһе лә оҡшамай, ә үҙҙәренең йәмғиәткә файҙа килтерерҙәй бер нәмәгә лә ҡулынан килмәй.

Башҡаларҙың эшен тәнҡитләп ултырғансы, ошо эште үҙең теләгәнсә, юғары кимәлдә атҡарып сығырға нимә ҡамасаулай һуң? Әлбиттә, үҙ иңенә яуаплылыҡ алыуҙан ҡурҡыу, шулай рәхәт йәшәүгә күнегеү ҡамасаулай. Урыстарҙың был мәсьәләлә донъяға ҡарашы шундай, улар: "Кысымаған урыны тырнама", "Инициатива өсөн язалайҙар", - тип кәңәш итә. Әммә башҡорт өсөн бер-береңә һылтанып, вайымһыҙ рәүештә ситтән күҙәтеп кенә тороу яҡшылыҡҡа илткән юсыл түгел. Хәҙер актив, инициативаһы булған кешеләр заманы. Беҙгә "Мин булмаһам, кем эшләр?" тигән принципты өҫтөнөрәк ҡуйып инициатива күрһәтә белергә, үҙ фекереңде аҡыллы итеп яҡлап өйрәнергә кәрәк.

Башҡорт халҡында "аҡыллы уҫал" тигән төшөнсә бар бит әле, бына шулай булайыҡ. Был һикереп сығып, башҡаларҙың фекеренә ҡолаҡ һалмайынса нигеҙләнмәгән фекерҙе ҡыҫҡырып әйтеү, теленә килгән бөтә нәмәне һөйләү, үҙеңде аҡлы итеп күрһәтергә тырышыу тигәнде аңлатмай: былар ғына фекереңде яҡлау түгел әле. Һинең фекереңдөрөҫлөккә тап килергә, асыҡ, аныҡ һәм халыҡҡа файҙалы булырға тейеш. Беҙ былай ҙа ялған мәғлүмәттәр таралған заманда йәшәйбеҙ һәм бойҙайҙан сүпте айыра белеү еңел түгел. Бына шулай, башҡорт халҡының рухи үҫеше, яҡты киләсәге атҡарған эше, әйткән һүҙе, йөкмәтелгән бурыс өсөн яуаплылыҡ тоя белгән милләттәштәр ҡулында булыуын белеп, үҙебеҙҙе тәрбиәләргә тырышайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Егерме өсөнсө февраль һеҙҙең өсөн ниндәй байрам һәм уны нисек билдәләйһегеҙ?*

***Камил ҠЫУАНДЫҠОВ, Өфө ҡалаһы:*** Совет Армияһында булған һәр ир-егет кеүек, минең өсөн дә 23 февраль - Яңы йыл, Еңеү көнө һымаҡ ҙур байрамдарҙың береһе, сөнки Ватанды һаҡлаусылар көнө - ул ҡыйыулыҡ, түҙемлелек, мәрхәмәтлек һәм тыуған ергә ҡарата һөйөү байрамы. Бөйөк Ватан һуғышы тарихына иң ауыҙ, дәһшәтле, хәл иткес бәрелештәрҙең береһе булараҡ инеп ҡалған Волгоградта хеҙмәт итеүем менән бик ғорурланам. Был тарафта үткән ике йылымды ҙур тормош мәктәбе, тип иҫәпләйем. Бөйөк Ватан һуғышында Ҡыҙыл армия һәм Вермахт араһында иң мөһим генераль алыштарҙың береһе булған, минең данлыҡлы яҡташтарым эҙен, батыр рухын һаҡлаған Сталинград урамдары буйлап уҙыуым минең ихтыярымды нығытты. Илебеҙҙең төрлө төбәгенән йыйылғайны беҙҙең рота. Төрлө ваҡыт була торғайны, әлбиттә, кемдер үҙенең өҫтөнлөгөн, икенселәр көсөн, өсөнсөләр үҙен күрһәтергә маташҡан мәлдәр ҙә була ине. Әммә беҙҙе ошо һәр урамы, йорто йөҙләгән, меңләгән ҡорбан менән ялап алынған Сталинград һуғышы темаһы берләштерә, дуҫлаштыра ине. Һүҙебеҙ шуға килеп терәлһә, әлеге генә низағлашып ултырған хеҙмәттәштәрем тыныслана, һәр кем үҙенең ошо снаряд ярсыҡтарынан телгеләнеп бөткән ерҙә яуҙа башын һалған олатайҙарының, туғандарының иҫтәлеген хөрмәт менән иҫкә алды. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, оҙаҡ йылдар бер-беребеҙҙе байрамдар менән ҡотлашып, открыткалар ебәреп, хатлашып торҙоҡ.

Башҡорттарҙа элек-электән илдең терәге - ир-егет, ғаилә терәге - атай кеше тип һаналған. Был хаҡта бик күп мәҡәл-әйтемдәребеҙ ҙә бар. Шуға ла уларға оло ихтирам, хөрмәт менән ҡараған. Был мөнәсәбәт әле лә дауам итә тип уйлайым. Хәҙер Ватанды һаҡлаусылар көнөнөң ял тип иғлан ителеүе лә шуны иҫбатлай. Шуға күрә был байрамға беҙҙең айырым мөнәсәбәт булыуына ғәжәпләнергә түгел. Уны мин төрлөсә байрам итәм. Йәшерәк саҡта дуҫтар менән йыйыла торғайныҡ. Хәҙер күберәк ғаиләмә, балалар, ейәндәр менән билдәләйбеҙ. Һуңғы йылдарҙа, ял көнө тип иғлан ителгәс, көн матур булһа, саңғы шыуырға сығып китәбеҙ. Паркта ла йөрөйбөҙ, Белорет тарафтарына ла сығып китәбеҙ. Дуҫтар килһә, караоке йырлайбыҙ. Ул да бик яҡшы күңел асыу сараһы. Уның арҡаһында совет осоронда яратып йырланған әллә күпме патриотик йырҙарҙы иҫкә төшөрөп, ятлап алдым. Бағырыҙға ныҡлы сәләмәтлек теләйем, балаларыбыҙға үрнәк булырға яҙһын, ғүмеребеҙ оҙон булып, тыныс күк йөҙө аҫтында йәшәргә насип итһен!

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ИШАРА

# КЕМ БАШ:

## ирме, ҡатынмы?

**Әсәйем тормош фәлсәфәһен тылҡый: "Инициативалы, аяғында ныҡ баҫып торған, һауанан торна тоторға маташмаған егеттәрҙе ҡара. Ирең үҙе мал табып, иңенә ятҡан яуаплылыҡты тойһа, уның ҡуйынында балда-майҙа йөҙөп йәшәрһең, үҙеңә ел-ямғыр теймәҫ. Бисә ауыҙына ҡарап, һинән көтөп ултырһа, йәшәрһең минең кеүек ир-бисә булып. Ярай әле, мин шәп, үҙе һымаҡ ҡатын эләкһә, ултырыҙар ине икәүләшеп ауыҙҙарын сөйгә элеп". Ҡаршы һүҙ әйтмәй, тыныс ҡына тыңлайым. Минең атайым, әсәйем әйткәнсә, улай уҡ йүнһеҙ түгел. Ул йомшаҡ күңелле, тыныс, игелекле, егәрле кеше. Бәлки, бындай заманда бик кәрәкле йүнселлек сифаты ғына самалыраҡтыр. Әсәйем уны бушҡа ғәйепләп, үҙ хатаһын танырға теләмәй...**

Гүзәл зат аҡса табып, карьера эшләп, һаман да үҙенең ир-атҡа тиң булыуын, хатта ҡайһы бер кимәлдә өҫтөнөрәк икәнен иҫбатларға тырыша. Ғилми һәм популяр әҙәбиәттә лә енестәр һуғышы тураһында йыш яҙалар. Ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә баш булырға, аҡсаны иренән күберәк эшләргә ынтыла. Быны менән үҙенә-үҙе ауырлыҡтар тыуҙырыуын, ҡапҡан ҡороуын да аңламай ҡатын-ҡыҙ. Ирҙәрҙән уҙҙырып, алдынан төшөп, илап, усаллашып, еңеп ала ла, уларҙың тәбиғи лидерлыҡ сифаттарын юҡҡа сығара. Барлыҡ ауыр мәшәҡәтте көсһөҙ иңенә һалып, йөк атылай, тормош үренә йүрмәләй. Ә тәбиғәт үҙенекен итә: бөтөнләй башҡа тәғәйенләнештә яратылған гүзәл заттың сыҙамлығы һына, инициативаһы кәмей, психикаһы ҡаҡшай. Шунда инде беҙ барлыҡ ирҙәрҙе йүнһеҙлектә ғәйепләп, ысын ирҙәр бөттө, тип саң ҡағабыҙ.

Ҡатын баш булған ғаиләлә ҡыҙ һәм ир бала ла атай-әсәһенең йәшәү рәүешен өлгө итеп ала. Ҡыҙ - әүҙемлеккә, ә көслө зат күләгәгә ынтыла. Ҡатын ҡыҙҙың көсө һәм аҡылы - көсһөҙлөктә, наҙлылыҡта, мөхәббәттә. Бер ваҡиға тураһында һөйләйем әле. Эшләгән еремдә урта йәштәрҙәге етәксе ағай ҡатын-ҡыҙға һәр ваҡыт йылы мөғәмәлә күрһәтә: машинанан төшкәндә ҡул бирә, ауыр сумкаларҙы күтәреп ала, өҫ кейемен кейергә ярҙам итә. Уның бындай ҡыланышын аңлаһам да, үҙемә ҡағылғанда уның еғеттәрсә мөнәсәбәтен бик ауыр ҡабул итәм. Ҡул һуҙһа, күрмәмешкә һалышам, йә гардеробтан тиҙ генә кейемде алам да, ситкә тайыу ягын ҡарайым. Бер көн бергә эшләгән егеттәр менән ауыр-ауыр аппаратура ташыйбыҙ. Етәксе ағай эргәмә килде лә: "Беләһеңме, һиңә кейәүгә сығыуы бик ҡыйын буласаҡ", - тине. "Ниңә?" - тип һорағанды көтмәй, яуап та бирҙе: "Ирҙәр артыҡ үҙаллы һәм көслө ҡатын-ҡыҙҙы яратмай". Уның ҡырҡыу һүҙҙәре ҡолаҡта бик оҙаҡ яңғырап торҙо. Әлеге ваҡытта мин алтын фекер әйткән ағайға тәрән рәхмәтлемен һәм уның менән тулыһынса килешәм...

**Тамсы ДИҢГЕҘБАЕВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһының Милли музейында генераль директор алмашынды. Хәҙер учреждениеһы Альбина Ярмуллина етәкләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әлегә тиклем музейға Марат Зөлҡәрнәев етәкселек иткәйне. Альбина Зөфәр ҡыҙы Ярмуллина элек Сибайҙың Тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры булды. Тарих фәндәре кандидаты.

✓Танылған шағир, прозаик, публицист һәм йәмәғәт эшмәкәре Рауил Шаммаҫҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр ул үҙенең 90 йәшен билдәләне. Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев маҡтаулы исемде языусының өйөнә килеп тапшырҙы һәм республика етәкселегенең ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе.

✓Рәсәйҙә ике һәм унан күберәк балалы ғаиләләр өсөн льготалы ипотека ставкаларының түбәнәйеүе ихтимал. Билдәле булыуынса, Президент Владимир Путин Хөкүмәткә һәм Үҫәк банкка 2021-2024 йылдарҙа льготалы ипотека программаларын ғәмәлгә ашырыу тәкдимдәрен тапшырырға ҡушты. Шулай уҡ дәүләт башлыҡ ике һәм унан күберәк балалы ғаиләләргә ипотека ставкаһын түбәнәйтеү тураһында мәсьәләне ҡарау бурысын йөкмәтте.

✓Башҡортостанда киҫкен респиратор вирус инфекциялары менән сирләүселәр арта бара. Әлеге ваҡытта республикала киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән ауырыу күрһәткесе эпидемиологик сиктән 18,9 процентҡа юғары. Башлыса өлкәндәр ауырый. Сирлеләрҙән яҡынса 55 проценты балалар тәшкил итә. Лаборатория тикшереүҙәре мәғлүмәттәре буйынса улар грипп вирусын йөрөтөүе асыҡланған. Шулай уҡ парагрипп, аденовирустар, риновирустар һәм метапневмовирустар билдәләнә.

✓1 февралдән төбәк операторҙары эшмәкәрлегенең өс зонаһында сүп-сар сығарыу өсөн хаҡ артты. Санитар ҡағиҙәләргә һәм нормаларға ярашлы, ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә ҡалдыҡтар, һауа температураһына ҡарамайынса, көн һайын, башҡа тораҡ пункттарҙа температура +4°С һәм унан түбәнерәк булһа, өс көнгә бер тапҡыр, +5°С һәм юғарыраҡ икән, көн дә сығарылырға тейеш. Әгәр үрҙә әйтелгән графикты боҙоу осраҡтары теркәлһә, ауылда булһынмы, йәки ҡаламы, граждандар 55 һум түләйәсәк.

✓ *Раҫланған ҡағиҙәләргә ярашлы, урта дөйөм белем биреү программаларын үҙләштергән уҡыусылар үҙ теләге менән башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханын тапшырырға мөмкин.*



ҠЫҪҠАСА

# АЛДАНҒАН ӨЛӨШСӨЛӘР...

**Башҡортостанда әлеге ваҡытта 7 меңдән ашыу алданған өлөшсө һәм 125 проблемалы объект иҫәпләнә. Күпселеге Өфөлә һәм Өфө районында урынлашҡан.** Былтыр Башҡортостан Республикаһының Төҙөләш һәм архитектура министрлығы Өлөшсөләр хоҡуктарын яҡлау фонды менән проблемалы төҙөлөш объекттарын берлектә финанслау механизмын индереү мөмкинлеге өсөн эш алып барҙы. Йыл йомғаҡтары буйынса, Фонд менән 62 объектҡа ҡарата мәсьәлә өйрәнелде, улар буйынса 3,5 меңдән ашыу өлөшсөнөң хоҡуктарын тергеҙеү планлаштырыла. Фондтың Күҙәтеү советы 53 объект буйынса финанслау тураһында ҡарар ҡабул иткән. 19 объект буйынса граждандарға аҡсалата компенсация түләнә. 700-гә яҡын граждан түләү алған да инде. 2021-2023 йылдарҙа 34 объект төҙөлеп бөтөргә тейеш. Төҙөүсенең бурыстарын республиканың Өлөшсөләр хоҡуктарын яҡлау фонды үҙенә ала.

✓ **Башҡортостанда льготаға эйә булғандарға Берҙәм аҡсалата компенсация түләү өсөн быйыл 4,2 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә, тип хәбәр иттеләр республиканың Хеҙмәт министрлығынан.** 2020 йылда республикала 525 мең кеше торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн сығымдарға дөйөм суммаһы 5 миллиард һумдан ашыуыраҡ аҡсалата компенсация алды. "Уҙған йылдың сентябренән коммуналь хеҙмәттәргә сығымдар буйынса һәм ошо хеҙмәттәр өсөн бөтөнләй бурысы булмаған осраҡта компенсация түләүе ҡаралған", - тип белдерҙеләр Хеҙмәт министрлығында. "Әгәр торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн сығымдар ғаиләнең ошондай хеҙмәттәр өсөн түләүгә сығымдарының рөхсәт ителә торған дәүмәленән юғары булһа, субсидия рәүешендә социаль ярҙам күрһәтелә. Ул республика бюджетынан түләнә", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓ **2020 йылда Башҡортостанда "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" программаһы сиктәрендә 32,67 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан.** 54 районда 385 ғаилә социаль түләүҙәр ярҙамында торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға өлгәшкән. Шулай уҡ социаль найм килешеүҙәре буйынса 22 районда 61 ғаилә торлаҡлы булған. Иң популяр механизм - льготалы ауыл ипотекаһы: банктар 4,5 миллиард һумға 2,2 мең кредит биргән. Программа сиктәрендә уҙған йылда бөтәһе 145 инфраструктура проекты бойомға ашырылған, шуларҙың 54-е - ауыл биләмәләрен төҙөкләндереү. Дөйөм алғанда, 2020 йылда программаны тормошҡа ашырыу өсөн яҡынса 2,46 миллиард һум йүнәлтелгән.Ошо кәндәрҙә төбәк һәм федераль Ауыл хужалығы министрлығы 2021-2023 йылдарға "КРСТ" программаһын ғәмәлгә ашырыу буйынса килешеү төҙөнө. Ошо йылдарҙа финанслауҙың дөйөм күләме 5,8 миллиард һум була.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МӘҘӘНИӘТ БИНАЛАРЫ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова менән осрашыуҙа Өфөнөң ил әһәмиәтендәге мәҙәни объекттарын реконструкциялау һәм ремонтлау өсөн федераль финанслау мөмкинлектәрен тикшерҙе.**

Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ошо осрашыуҙа тикшерелгән мәсьәлә буйынса шулай тип яҙҙы: "Өфөнөң юбилейына әҙерлектең мөһим йүнәлештәренең береһе - 2017 йылдан ябылған Дәүләт циркын ремонтлау. Был бинаның торошо балаларҙа һәм уларҙың ата-әсәләрендә ауыр хистәр тыуҙыра, осрашыуҙарҙа ошо хаҡта йыш ишетәм. Артабан. Өфөләге күркәм, традицияларға бай Ҡурсаҡ театры шулай уҡ ренставрациялауға мохтаж. Унда һәйбәт грим һалыу һәм костюмдар бүлмәһе лә, буфет та юҡ. Бында, һис шикһеҙ, балалар студиялары ла эшләргә тейеш, уларҙы урынлаштырырға урын юҡ. Кисекмәҫтән был бинаға заманса төкәтмә төҙөргә кәрәк. Беҙҙең Рус драма театрында ла яҡтыртыу һәм тауыш ҡоролмалары 1982 йылда төҙөлгәндән бирле яңыртылмаған. Сәхнә һәм зал 20 йыл ремонтланмаған..."

Радий Фәрит улы билдәләүенсә, Башҡортостан коворкингтар, ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса клубтар эшләгән, лекциялар, балалар, ғаиләләр өсөн төрлө саралар үткәрелгән ҙур заманса китапханаға ла мохтаж.

# НИГЕҘЛЕ ЯЛЫУҘАР

**Республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә халыҡтың дауахана-поликлиникаларыбыҙға йыш зарланыуы тураһында яҙҙы.**

Күпселек биналар 50-60 йыл элек һалынған, уларҙа ҡараңғы һәм тығыҙ, файҙаланыу ваҡыты сыҡҡан ҡоралмалар күп. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, был ялыуҙар нигеҙле - халыҡ уңайлы медицина учреждениеһына килергә һәм сифатлы ярҙам алырға тейеш. "Алдағы биш йылда һаулыҡ һаҡлауҙың беренсе звеноһын яңыртыу өсөн 18,5 миллиард һум тотоноу ҡарала. Башҡортостанда 530-ҙан ашыу яңы медучреждение төҙөлә, 70-е капиталь ремонтлана. Быйыл ике мөһим объектты - Бөрөлә ҙур поликлиника һәм Саҡмағош ауылында 250 кешене ҡабул итерлек поликлиника төҙөүҙе тамамлайбыҙ. Уларҙы 2021 йылда файҙаланыуға тапшырырға уйлайбыҙ. Ә 2022 йылда тағы дүрт ҙур төҙөләштә - Учалы ҡала дауаханаһында һәм Өфө кардиология үҙәгендә хирургия корпустарын, шулай уҡ Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы янында һәм Затонда поликлиникалар бинаһы төҙөүҙе тамамларбыҙ. Быйыл Республика балалар онкологияһы һәм гематология үҙәген, Баймаҡта балалар поликлиникаһын төҙөй башлайбыҙ. Тотош республикала табиптар эшләй, ә пациенттар унайлы шарттарҙа дауалана - бына ошо маҡсатҡа йілап, ләкин дөрөҫ йүнәлештә барырға тейешбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ИМТИХАН

**Башҡортостанда мәктәп тамамлаусылар башҡорт теленән имтихан тапшыра ала.**

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Ҡарарына ярашлы, 2007 йылдан башлап башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханы формаһында йомғаҡлау аттестацияһы уҙғарыла. Әлеге ваҡытта документ норматив-хоҡуки базаға тап килтерелгән. Башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханын уҙғарыу тураһында яңы ҡарарға республика Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Документ рәсми хоҡуки мәғлүмәт порталында баҫылған. Раҫланған ҡағиҙәләргә ярашлы, урта дөйөм белем биреү программаларын үҙләштергән уҡыусылар үҙ теләге менән башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханын тапшырырға мөмкин. Республиканың Мәғариф министрлығына имтиханды уҙғарыу тәртибен әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелгән. Башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханын үткәреүгә бәйле сығымдар министрлыҡ бюджеты иҫәбенә тормошҡа ашырыла, тип билдәләнә документта.

# МӘКТӘПТӘ НИСЕК АШАТАЛАР?

**Һуңғы биш айҙа Башҡортостан Хөкүмәте ата-әсәләрҙән мәктәп туҡланыуы тураһында 900-ҙән ашыу ялыу алған. Был хаҡта республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте.**

Премьер-министр үткәргән кәңәшмәлә 2021 йылдың 1 мартынан индереләсәк биш яңылыҡ ҡабул ителде. "Ата-әсәләр аҙыҡ тәмһеҙ, йыш ҡына һыуыҡ булыуы, балаларының ашауҙан баш тартыуы һәм көнө буйы ас йөрөүе тураһында яҙа. Мәктәп уҡыусыларының ашҡаҙанын боҙоу ғына етмәгәйне беҙгә! Дәүләт финанстары менән идара итеү йөнһәтенән дә был яраған эш түгел. Мәктәп туҡланыуына бүленгән ике миллион бюджет аҡсаһын сүплеккә сығарып ырғытҡан һымаҡ булып сыға инде", - тине Андрей Назаров. Тәҡдимдәр шундай булды. Беренсенән, мәктәп туҡланыуын контролдә тотоу, йәғни урындағы хакимиәт чиновниктары Мәғариф, Сауҙа министрлыҡтары, Роспотребнадзор вәкилдәре менән бергә уҡыусыларҙың туҡланыу сифатын күҙәтергә тейеш. Икенсенән, мәктәп сайтында көн һайын блюдолар менюһын баҫырға. Өсөнсөнән, ризыҡ составын тикшереү өсөн лабораторияға ебәрелгән продукция өлгөләрен контролгә алырға. Бөгөн был талапты барыһы ла үтәмәй. Дүртенсенән, туҡланыу йәйға һалынған мәктәптәрҙә башҡа белем биреү учреждениелары өсөн өлгө итеп ҡуйырға. Бишенсенән, эш процесын ойоштороусы, аҙыҡ менән тәьмин итеүсе һәм етештереүсе һүрәтләнгән төбәк картаһын эшләргә.

Әйткәндәй, Өфө ҡала округы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 26 февралдә баш ҡаланың мәғариф учреждениеларында атай-әсәйҙәр балалар өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙы үҙҙәре тәмләп ҡарай, уларҙың сифатын баһалай аласаҡ.

# ЭҘЕМТӘҺЕН БЕЛМӘЙҘӘРМЕ?

**Февраль аҙағында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа балиғ булмағандарға энергетик эсемлек һатҡандарҙан штраф түләттереү тураһында үҙгәрештәр индерергә ниәтләй.**

Закон 2020 йылда ҡабул ителде, әле штраф күләме билдәләнә. Парламент рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, мәғариф, медицина учреждениеларында, ял һәм сәләмәтләндереү ойошмаларында энергетик эсемлек һатҡан өсөн граждандарға - 3-4 мең һум, вазифалы кешеләргә - 30-40 мең һум, юридик шәхестәргә 150-200 мең һумға тиклем штраф һалынасаҡ. Законды икенсе тапҡыр боҙған осраҡта уның күләме тағы ла артасаҡ. "Үҫмерҙәр йыш ҡына энергетиктарҙың зарарлы эҙемтәһен белмәй эсә, - ти Константин Толкачев. - Уны даими рәүештә ҡулланыу физик һаулыҡҡа ғына түгел, ә психикаға ла кире йоғонто яһай. Йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларынан тыш, депрессияға, психик ауырыуҙарға ла килтерергә мөмкин".

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Башавтотранс" йәмәғәт транспортында юл йөрөү хаҡын арттырыуҙары тураһында иғлан иттеләр. Был 1 марттан ғәмәлгә индерелә. Республиканың алты ҡалаһында: Өфөлә, Бөрөлә, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта, Учалыла һәм Салауатта, шулай уҡ Асҡын, Ҡариҙел ауылдарында хаҡ күтәрелә. Өфөлә: ҡулаҡса йәки банк картаһы менән иҫәпләшкәндә - 29 һум, экспресс режимы - 35 һум, "Алға" картаһы менән түләгәндә - 23 һум, экспресс режимы - 28 һум. Граждандарҙың льготалы категорияһы өсөн берҙәм социаль юл йөрөү билетының хаҡы үҙгәрмәй - 600 һум. "Бәхетле сәғәт" акцияһы дауам итә.

✓Баш ҡалала Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы пациенттары өсөн билдәле бренд менән ялған эремсек килтерелгән. Республика буйынса Россельхознадзор идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Бәләбәй һөт комбинаты" бренды менән килтерелгән продукция был һөт комбинатында етештерелмәгән. Тикшереү һөҙөмтәһендә был продукт тәбиғи эремсек түгел, яһалма булып сыға.

✓Өфөлә 12 архитектура һәйкәленә ремонт эшләнәсәк һәм реставрация үткәреләсәк. Аукцион йомғаҡтары буйынса "Уралнефтьспецмонтаж" яуаплылығы сиклөнгән йәмғиәт еңеүсе була. Ул Ҡулса (38,88,24-се йорттар) Новороссийск (4), Архитектура (14, 18), Тыныслыҡ (37), Үҙәк (16,2), Октябрь проспекты (3, 5, 9) урамдарында урынлашҡан йорттарҙың фасадын һәм ҡыйыҡтарын ремонтларға тейеш.

✓Өфөлә юниорҙар араһында биатлон буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында республика спортсылары ете миҙал яулауға өлгәште. Башҡортостан Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ярыштың беренсе көнөндә "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексы майҙансыҡында 10 саҡрымға спринтта 20 йәшлек Эдуард Имаев алтын миҙал алды. 19 йәшлек Алмаз Вәлиев (10 саҡрым) һәм 21 йәшлек Мария Дубровская (7,5 саҡрым) бронза призер булды.

✓Өфөнөң тау саңғыһы буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүселәре Ярославлдән бер көмөш һәм ике бронза миҙал алып ҡайтты. Рәсәй кубогының почет пьедесталында - Кирилл Самородов (икенсе урын), Илдар Хәкимов һәм Ксения Шаронова (өсөнсө урын). Шулай уҡ фристайл буйынса илдең үҫмерҙәр беренселеге барышында Степан Цапалов "акробатика" дисциплинаһында өсөнсө булды, ә Арина Муллағәлиева көмөш миҙал яуланы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# АЯҒЫҢДЫ...

## юрғаныңа ҡарап һуҙырға өйрән




**Үтә ашығыс рәүештә аҡса кәрәк булһа, кешенән бурысҡа алып тороу хәҙерге заманда мөмкин булмаған эш тиерлек. Бөтә ялыныс - микрозайм ойошмаларына. "Бер аҙнанан эш хаҡы бирәсәктәр, түләрмен әле..." Тик аҙна үтеүгә хәл бөтөнләй үҙгәреп китеүе лә мөмкин. Нимә мәжбүр итә беҙҙе микрозайм һорап барырға?**

Берҡатлылыҡ һәм матди ынтылышта аяҡты юрғанға ҡарап һуҙа белмәү. Микрозаймдарҙы данлаған һәм телевизор аша көн дә тиерлек күрһәтелгән роликтар ҙа беҙҙең халыҡтың ошо үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп эшләнә. Мәҫәлән, олатаһы менән ейәне боҙ майҙаны янынан үтә. Малайҙың күҙҙәре моңһоу - уның да ошо майҙанға сығаһы бик килә, ләкин спорт кейеме, клюшкаһы, каскаһы... ҡыҫҡаһы, спорт кәрәк-ярағы үтә ҡиммәт. Шул саҡ кадр алмашына: ҡәнәғәт малай яңы хоккей формаһында ҡапҡаға гол индерә. Тамашасылар гөр килә. Ә малайҙың атаһы, уның олатаһына табан боролоп, ғәжәпләнеп һорай: "Нисек? Ҡайҙан?" Олатай булған кеше ғорур ғына иңбашын һикертә: "Микрозайм!"

Бик тә тойғоло тарих. Шунда уҡ микрозайм таратҡан урынға йүгерәһе килә. Тик бына реклама унда проценттарҙың ҡот осҡос - йылына 200-300 (!) процент икәнен өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә. Тимәк, пенсионер үҙен бурыс һаҙлығына батырған. Киләһе пенсияны бер айҙан ғына, ә проценттар көн дә үҫә бара. Хатта үҙенә ашарға, дарыу алырға ҡалдырмаған хәлдә лә ҡар йомарлағы кеүек ҙурая барған бурысты тиҙ генә түләүе, ай-һай...

Кредит алырға ятатаһыңмы? Был һорау артыҡ та кеүек - кредитһыҙ йәшәгән кешене осратыуы ҡыйын хәҙер. Ләкин бурысҡа алғанда матур әйбергә күҙ ҡыҙыуҙан алда аҡыл менән үлсәргә, мөмкинлегеңде самалап ҡарарға кәрәк. Хәйер, йыш ҡына кешене бер ҡатлылыҡта ғәйепләүе лә ҡыйын - тормошта ниндәй генә хәлдәр булмай, ҡайһы саҡта аҡса үтә ашығыс кәрәк шул. Бөгөнгө пандемия шарттарында, эш хаҡы менән тотҡарлыҡтар килеп сыҡҡанда бигерәк тә. Был мәкәлә шундайҙарға - ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫеүселәргә - иҫәпләнгән, сөнки күптән түгел кредит алыусыларҙың тормошон ҡатмарландырыусы закон үҙ көсөнә инде...

Был ҡануниәт тәүге сиратта бирәсәгенен онотоп, бөгөн ҡулға алған ҙур сумманан үрле-ҡырлы һикереп шатланыусыларға ҡағыла: "Нотариат тураһындағы ҡануниәт нигеҙҙәре"нә үҙгәрештәр индереү һөҙөмтәһендә банктарға кредит буйынса кисектерелгән бурысты ҡайтартып алыу ябайлашты. Хәҙер улар бының өсөн судҡа мөрәжәғәт итеп тормай, нотариустан ҡарар сығартып ҡына аласаҡ һәм артабан бурыслының мөлкәтен ҡулға алыу эшенә бер хоҡуҡи тотҡарлыҡһыҙ тотонасаҡ. Суд эше, белеүебеҙсә, бик сетерекле һәм оҙайлы процесс. Ултырыштар әленән-әле кисектерелә: йә теге яҡтың адвокаты килмәй, йә был яҡ сирләп китә йәки ашығыс командировкаға киткән. Йылдар буйы барған суд эштәре бихисап. Ә бушҡа киткән ваҡыт - банк өсөн иҡтисади юғалтыу. Шуға күрә яңы ҡанун улар өсөн бик отошло булып сыҡмаҡсы.

Кисектерелгән бурыс тип түләү датаһынан һуң ике ай буйы ҡайтарылмаған аҡсаны атайҙар. Рәсәй Граждандар кодексының 811-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, түләү ваҡыты уҙған бурысҡа айырым процент ҡулланыла алыуы ҡанунлаштырылған. Ә илдең Юғары суды Пленумының 1998 йылдың 4 октябрендәге 13-сө һанлы ҡарары был проценттарҙың кредит килешеүендә ҡаралғандан да ҙураҡ булыуын законлы тип таный. Тимәк, бурысты ваҡытында ҡайтармаһаң, банктарға үпкәләргә урын юҡ. Хәҙер килеп, банктарға бурысты ҡайтартыу енеләйҙе. Улар бурысҡа аҡса биргәндә килешеүгә яңы шартты ла яҙа ала - кисектерелгән бурыс нотариус ҡарары нигеҙендә мәжбүри түләтеләсәк.

Бер нәмә лә буш урында тыумай. Банктарҙы ла шундай ҡанунды ҡабул иттереүгә өлгәшергә нужа мәжбүр иткән. "Бурысты ҡайтарыуҙың оҙаҡҡа кисектерелеүе бик күптәрҙең ябай ғына ла финанс белеме етешмәүе һәм берҡатлылығы арҡаһында килеп сыға. Ундайҙар алдағы килемдәрен күҙ алдына насар килтерә һәм үҙ көстәренә артыҡ ышана", - тип аңлата банк кредиты буйынса эксперттар. Кредит тарихы буйынса милли бюро хисаплап сығарыуынса, Башҡортостанда 14 йылға иҫәпләнгән 1,5 миллион һумлыҡ ипотека кредитын даими түләп барыу өсөн айына 60 мең һумлыҡ килемгә эйә булыу мотлаҡ. Ә күпселектең айлыҡ килеме был күрһәткестән алыҫ.

**Рәшит КӘЛИМУЛЛИН.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ СТЕЛА УРЫНЫ...

**Баш ҡалала "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын урынлаштырыу урыны асыҡланды.** Ошоға тиклем дауам иткән тауыш биреү һөҙөмтәһенән 16 февралдә "Берҙәм Рәсәй" төбәк сәйәси советы Президиумы ултырышында ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков иғлан итте. Тауыш биреүгә ике вариант сығарылғайны: Еңеү паркына инеү урыны һәм Зәки Вәлиди урамы менән Ленин урамы киҫелеше. Тауыш биреүҙә 17 мең кеше ҡатнаша, ахырҙа 66,4 процент тауыш менән беренсе вариант еңеү яулай. "Әлеге ваҡытта ошо исемгә лайыҡ булған 20 ҡалала берҙәм стела ҡуйыу мәсьәләһе хәл ителә", - ти Сергей Греков.

✓**Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫелешендә юл сиселешен реконструкциялау эше дауам итә.** Күпер төҙөүселәр элемтә кабелен, һыу торбаларын сығарыу менән шөғөлләнә, шулай уҡ быраулап тултырыла торған свайҙар урынлаштырыу эштәре алып барыла. 16 февраль мәғлүмәттәре буйынса, кәрәкле 51 свайҙың бишеһенен генә эшләргә ҡалған. Реконструкция алып барылған территорияла транспорт хәрәкәте даими контролләнә, светофорҙарҙың эшләү режимы көйләнеп тора. Бынан тыш, юлдағы хәл-торошто "Уфанет" тышҡы видеокүҙәтеү камералары ярҙамында күҙәтергә була. Юлдың иң тығыҙ участкаһында ла пик сәғәттәрендә 10 баллыҡ "тығын"дар күҙәтелмәй, сөнки автоһәүәҫкәрҙәр реконструкция барған участканы урап үткән альтернатив юлдарҙы файҙалана.

✓**Комсомол һәм 8 Март урамдарын тулыһынса реконструкциялау быйыл ноябрь һуңында тамамланасаҡ.** Әлеге ваҡытта бында инженер селтәрҙәрен урынлаштырыу эштәре алып барыла. "Урамдарҙа хәрәкәт дүрт һыҙатлынан алты һыҙатлыға әйләнгәнлектән, юлдарға тура килгән коммуникацияларҙы унан ситкә сығарыла, - ти ҡала хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Константин Паппе. - Был эштең ҙур өлөшө былтыр башҡарылды, шуға ҡарамаҫтан, ҡышҡы миҙгелдә ямғыр һыуы коллекторын төҙөп бөтөргә, юғары вольтлы кабелдәрҙе, элемтә сымдарын сығарырға кәрәк. Апрель-майҙа был эштәр тамамланырға һәм юл һалыуына башларға тейеш". Асфальт һалыу октябргә тамамланыр тип күҙаллана, һуңынан инде урамдарға видеокүҙәтеү ҡуйыла, яҡтыртыу сығанаҡтары урынлаштырыла. Дөйөм алғанда, объекттар ноябрҙә тапшырыласаҡ.

✓**Салауат Юлаев проспектын артабан дауам итеү - реаль проект һәм ул тормошҡа ашырылырға тейеш, ти БР транспорт һәм юл хужалығы министры урынбаҫары Виктор Жульков.** Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса быға 10 миллиард һум аҡса кәрәк. "Хәҙер республика проект эшләү өсөн аҡса бүлә. Ике йыл дауамында Интернационал урамына алып сыҡҡан проект әҙер булырға тейеш. Ике вариант бар, баш ҡала һайлап алғандан һуң проект тормошҡа ашырыла башлаясаҡ", - тине ул. Ҡала хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау идаралығы начальнигы вазифаһын башҡарыусы Константин Паппе белдереүенсә, Ватутин урамынан Адмирал Макаров урамы аша Интернационал урамына алып сыҡҡан проект һайланған. Уның оҙонлоғо 3,68 километр. Әлеге ваҡытта проекттың беренсе этабы Һупайлы биҫтәһендә тормошҡа ашырыла ла инде: Баязит Бикбай урамы киҫелешендә юл сиселешен проектлау эше алып барыла. Ул быйыл әҙерләнеп бөтһә, йыл һуңында дәүләт экспертизаһы үтәсәк. Әгәр киләһе йыл финанстар бүленһә, төҙөлөш-монтаж эштәре башланасаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тымау тейгәндә

❖ Тымау оҙаҡ үтмәгән осраҡта йылы һыу ҡойолған стаканға берәр балғалаҡ бал һәм алма һеркәһе ҡушып, бал тулыһынса ирегәнсе болғатырға. Килеп сыҡҡан шыйыҡсаны танауға тартығыҙ, әммә бик һаҡ булығыҙ. Ошо рәүешле танауҙы көнөнә бер нисә тапҡыр сайырға. Һауыҡҡансы дауаланырға.

## Холестерин

**Холестерин кимәле юғары булһа, тәү сиратта майлы йәки ҡыҙҙырылған аҙыҡтан баш тартырға кәрәк. Унан һуң өс өлөштән торған дауаланыуға күсергә:**

❖ Арыҫлан ҡойроғо, эт дегәнәге (череда) үләндәрен, ябай дардар ағасы япрағын, ҡайын еләге япрағын, энәлек сәскәһен, бәпембә тамырын бер тигеҙ нисбәттә алырға һәм ҡушып онтарға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 1 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 минут талғын утта ҡайнатырға һәм алып, өҫтөн ябып 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне 3 өлөшкә бүлеп, 3 көн дауамында ашарҙан алда эсергә. Ул нервыларҙы тыныcландыра, организмды шлактарҙан таҙалай. Төнәтмәне бер ай эскәндән һуң, дауаланыуҙың икенсе курсына күсергә.

❖ Ваҡланған бойҙай орлоғон (100 грамм) ҡабығынан әрсемәйенсә ит турағыста үткәрелгән 0,5 кг әфлисунға ҡушырға, өҫтөнә 1 литр аҡ шарап ҡойорға һәм 1 кг шәкәр өҫтәргә. Яҡшы болғатырға, 1 сәғәт парҙа тоторға. Уны көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс 50-шәр грамм эсергә. Әҙерләмә бөткәнсе дауаланырға.

❖ Дауаланыуҙың өсөнсө өлөшөндә склерозға ҡаршы дарыуханәнан алынған төнәтмәләр эсергә кәрәк. 2 өлөш имбир, 3 өлөш люцерна, 7 өлөш һарымһаҡ төнәтмәһен бер һауытҡа ҡойорға. Төнәтмәләр ҡатнашмаһын даими рәүештә көнөнә 1-3 тапҡырға тиклем 70-әр тамсы эсергә. Холестерин кимәле бер йылдан да тиҙерәк нормаға килә.

## Сәләмәтлек өсөн

❖ 1-әр өлөш ҡырҡбыуын үләне, һары мәтрүшкә үләне, меңъяпраҡ үләнен ҡушып, сәй бешерергә һәм көнөнә 3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Ике-өс быуат элек башҡорттар йөн туҡымаһын төрләләрен эшләй белгән. Көнкүрештә йөн туҡыма, мәллә, буҫтау, соға, тула кеүек билдәләмәләр ҡулланылған. Йыш ҡына туҡыма атамаһы әйберҙәкенә тап килгән; туҡыма тураһында сәкпән/сәкмән, шал/шәл тип һөйләгәндәр. Былдай уртаҡлыҡтар боронғоға хас күренеш һәм бик күп төрки, Иран халыҡтарында ла осраған.

Бөтә осраҡтарҙа ла туҡыманың йөн ептәре ябай туҡыма ысулы (полотняное переплетение) менән һуғып ялғанған. Буйға һәм арҡау йыш ораҡтарҙа тигеҙ алмашынған, епкә еп тура килгән. Башҡортостандың көньяғында туҡыманың киңлеге 26-32 сантиметр тәшкил иткән. Йылы кейем өсөн туҡыманы тығыҙ сиратылған, ике ҡатлы ептән арҡау ебен ҡаты тартып һуҡҡандар. Шарф, шәл, сылғау өсөн кирәһенсә эшләнгән, һуҡҡанда ла нығ тығыҙламағандар һәм әйберҙәр ҡабарынҡы, йомшаҡ килеп сыҡҡан. Сәллә өсөн нәҙек йөнлө һарыҡтарҙың йөнө - шленка (шлун) тотонолған, бер ҡат ептән туҡығандар. Ҡайһы бер осраҡтарҙа шәл, шарф, ҡушаҡ (билбау) эшләгәндә асыҡ һәм ҡара төҫтәге ике төрлө еп ҡулланғандар: әйберҙәрҙе йә киң, йә тар арҡыры һыҙаттар менән биҙәгәндәр. Шәл һәм шарфтарҙа оҙон суҡтар рәүешендә ептәр ҡалдырылған.

"Мәллә" һүҙе башҡорт һөйләктәрендә ҡаты, тығыҙ йөн туҡыма тип аңлатыла. Элек башҡорттарҙа ҡаҙаҡтарҙа, төркмәндәрҙә һәм башҡа күсмәндәрҙә кеүек үк, был термин дөйә йөнөнән булған туҡыма һәм кейемде билдәләү өсөн ҡулланылған. Тәбиғәт шарттары яҡшы булмау сәбәпле хатта көньяҡтағы башҡорт ауылдарында ла дөйә һаны бик аҙ булған, ә XIX быуатта төбәктә улар бөтөнләй юғала. Әммә Ырымбур, Орск, Троицк баҙарҙарында, ҡайһы саҡта илан улустарында башҡорттар ҡаҙаҡтарҙан һәм ҡырғыҙҙарҙан дөйә йөнөн һатып алған.

"Буҫтау" һәм "соға" һүҙҙәре йоҡа, сифатлы сукно тигәнде аңлатҡан, һуңғыраҡ осорҙа улар һатып алынғанына ҡарата ҡулланыла башлай. Соға һүҙенең икенсе мәғәнәһе лә бар - буҫтау кант йәки байрам кейемдәре һәм түй келәмдәрендә төҫлө буҫтауҙан ҡайма. Был төр туҡыманы ҡаҙаҡтар ҙа "шуға" тип атаған.

Үҙбәктәрҙә, төркмәндәрҙә һәм Урта Азияның башҡа халыҡтарында, шулай уҡ Кавказда киң таралған йоҡаҡ һәм йомшаҡ йөн туҡымаларҙың "шал"/"шәл" тигән Иран атамаһы башҡорттарҙа башлыса ҡатын-ҡыҙҙарҙың йылы өҫ кейеме лә булған яулыкпледтарына ҡарата ҡулланылышта нығынған. Уларҙы иң юғары сифатлы һарыҡ йөнөнән, дебет ҡушып һуҡҡандар. Былдай материал әҙерләү барышын XIX быуат аҙағында Әбйәлил районы Ташбулат ауылында йәшәгән итальян профессоры Соммье күҙәткән: "Мин кәзә мамығынан эшләнгән ярайһы уҡ йоҡа, йомшаҡ һәм йылы туҡыманы күрҙем".

XX быуат башында һарыҡ йөнөнән ҡулдан һуғылған туҡымаларға ҡарата иң йыш ҡулланылған термин - "тула" булып ҡалған. Ул үҙенсәлекле технологик процесс - тула баҫыуға бәйле булған. Туланан ойоҡ, ауаҡ кейеменең ҡунысын, сәкмән, баш кейеме, ат япмаһы, келәм һ.б. ҡупшы һәм ҡулланыуҙа уңайлы әйберҙәр теккәндәр.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ТОРМОШ МӘКТӘБЕ

# ӘРМЕЛӘРГӘ БАРҺАҢ...

## бабайланма!



**"Улың әрмегә киткән тип ишеткәйнем. Нисек хеҙмәт итеп йөрөй? Шылтыратамы?" "Унда-бында һөйләшкеләп торабыҙ былай..." "Һаулығы нисек?" "Һалҡын тейҙереп, бер аҙ тымаулап торам, тигән була. Нишләп табипҡа бармайһың, тип әйтһәм, "бабайҙар" ебәрмәй, ти..."**

Ошолай итеп, танышымдың, уның улының хәл-әхүәлен белешеп алыуым һис кенә лә көйөф өҫтәмәне. Бына һиңә! Элек, ике йыллыҡ әрме хеҙмәте булған осорҙа, һалдат йыл ярым хеҙмәт иткәс кенә "бабай" була ала ине. Ә хәҙер, күрәһең, ярты йыл хеҙмәттән һуң да "бабайлашып" алалар. Хәрби хеҙмәттә бер йылға ҡалдырғас, әллә әлеге "бабайлыҡ" тигән нәмә бөтөнләйгә бөтмәҫме, тигән уйым да юҡ түгел ине. Бөгөн бер хеҙмәтен тамамлап ҡайтҡандар ҙа "беҙҙә ундай нәмә булманы", тигәс, хатта бер аҙ тынысланғандай ҙа булғайным, әммә сирек быуат әрме эсендә йөрөгән кеше булараҡ, былдай йылы хәбәрҙәргә тулыһынса ышанып та етә алманым. Утһыҙ төтөн сыҡмай, тигәндәй, әлеге танышымдың улы хеҙмәт иткән, шулай уҡ башҡа частарҙа ла ана шул боронғо ғөрөф-ғәҙәт һаҡлана килгәр. Сирләп киткән йәш һалдатты табипҡа ебәрмәй тотоу ҙа әлеге "бабайлыҡ"тың бер билдәһе инде ул. Күптән түгел рядовой Фәләновтың әллә нисә хеҙмәттәшен атып үлтергәне өсөн оҙаҡ йылға ҡаты режимлы колонияға ебәрелгәне хаҡында хәбәр ишетелде. Был фажиғә лә тап ана шул "бабайлыҡ" касафаты менән бәйле булмағайы, тим...

Ошондай вәҡиғалар килеп тыуһа, күптәрҙең күҙ алдына бәләнең төп ғәйепләһе булып әрменең үҙе килеп баҫа. Әрме хеҙмәтендәге "тәртипһеҙлек"тә командирҙарҙың үҙ бурыстарына илке-һалҡы ҡарауы ғәйепләнә. Ҡулы аҫтындағы һалдатын "дөрөҫ тәрбиәләмәгән", йәнәһе. Әлеге һалдат хеҙмәт иткән частә взвод командиры булған егерме бер йәшлек лейтенанттан алып, генерал дәрәжәһендәге дивизия командирына тиклем хеҙмәт буйынса һәүетемсә ҙур ғына яза алғанлыҡтарына иманым камил. Ғәҙәттә, командирҙарҙың хәрби званиеһын түбәнәйтеү, хатта эшенән төшөрөүгә тиклем барып етә былдай язалар.

Һалдат мөхитендә урын алған әлеге бабайлыҡ һөҙөмтәләренең барыһы ла тиерлек әрмеләге дауахана - госпиталь аша үтмәй ҡалмай. Хәрби табип булараҡ, күп кенә шундай күңелһеҙ хәлдәр менән осрашырға тура килә ине. Шулай бер мәл, госпиталдә дежурҙа торғанда, таң алдынан бер һалдатты алып килделәр. Башы бәйләнгән. Үҙ аңында. Ниндәйҙер бер төҙөләш материалдарын һаҡлауға ҡуйылған ике һалдаттың береһе. Был яралы егеткә хеҙмәтен тамамлауға ни бары бер ай самаһы ғына ҡалған. Ә икенсеһе - ярты йыл ғына хеҙмәт иткән һалдат ҡасып киткән, уны инде эҙләй ҙә башлағандар... Баш һөйәге онталған был һалдатҡа нейрохирургтар шунда уҡ операция яһаны. Операциянан һуң йүнәлеп, дембелгә бер нисә айға һуңлап ҡайтып китте. Уның менән һаҡта булған әлеге йәш һалдатты ҡулға алдылар. Һуңынан асыҡланыуынса, теге ҡарт һалдат йәш һалдатты һәр саҡ йәберләгән булған икән. Йәш һалдат унай мәлде тура килтереп, "бабай" йоҡлаған саҡта уның башына балта менән сапҡан. "Үсен алыусы" был һалдатҡа ниндәй яза биргәндәре миңә мәғлүм түгел, әммә командирҙарына, әлеге әйтмешләй, яҡшы ғына эләкте инде...

Һәр ата-әсә ил һағына оҙатып, улдарының һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуын теләй. Улдары хәҙмәт итә башлаған дәүерҙә гәзиззен өлкән һалдаттар рәнйетмәһен тип тә нык ҡына борсолалар, һәр саҡ шул хаҡта һорашҡылап, хәлен белешеп тә торалар. Һалдат улдары инде үҙе "бабай" дәрәжәһенә күтәрелеп алғас, "хәҙер уның хеҙмәт ауырлыҡтары артта ҡалды" тип , ата-әсә иркен тын алып ҡуя, һуңғы осор һирәгерәк тә шылтырата башлаған гәзизенең хеҙмәт срогын тултырып ҡайтыуын көтә башлай. Минең ныҡлы инаныуымса, инде ҡарт һалдат дәрәжәһендәге уландар өсөн дә борсолоу кәрәктер...

Хеҙмәт иткән дәүерҙә йыш ҡына казармаларға барып, яҡташтарыбыҙҙы (айырыуса йәштәрен) яҡлашып, һалдат мөхитенең эсендә йөрөргә лә тура килгәләй торғайны. Шуға күрә, минең ошо мәсьәлә буйынса фекерләүҙәрем ата-әсәнекенән бер аҙ башҡасараҡ булыуына гәжәпләнмәгеҙ. "Әрмеләге бабайлыҡ" мәсьәләһенә күптәр "ҡыйырһытылған" һалдат ата-әсәһе күҙлегенән сығып ҡарарға ғәҙәтләнгән. Ә мин ата-әсә улдарының "бабай" булып киткән осорон да күҙ уңынан ысҡындырмаһын ине, тигән фекерҙе алға ҡуям. Командирҙар нисек кенә контролгә алырға тырышыуына ҡарамаҫтан, "бабай" булғыһы килеп, үҙен башҡаларҙан күпкә өҫтөн тоторға теләүсе (әйҙән үк "потенциаль бабай" булып килгән) һалдат барыбер берәй мөмкинлеген таба һалып, уставтан тыш булған мөнәсәбәттәрҙе атҡарырға ынтыла инде ул. "Инә һөтө менән инмәгән - тана һөтө менән инмәй", тигән мәҡәл бар бит әле.

Бер мәл госпиталгә бер йәш һалдатты алып килделәр. Сәстәре тош-тош урындан ҡойолғолаған, тәнендә күгәргеләгән урындары бар. Һалдат һөйләшә һалып бармай. Кемдәндер ҡурҡҡаны тойола. "Ҡайҙан был "синяктар" тип һорағанға, "йығылдым" йә "төкөнөм" тип алдашыуы ла һиҙелеп тора. Сәстәре лә "үҙенән-үҙе ҡойолоп бөткән" имеш... Оҙаҡ ҡына госпиталдә ятты ул. Бөтә төр табиптар ҙа уны тикшерҙе, шул иҫәптән, психоневролог та. Табиптарҙың береһе шулай ҙа һалдаттың теленә "асҡыс" таба алған. Уны бер өлкән һалдат ҡыйырһытҡан икән. Сәстәрен дә ул бөртөкләгән, туҡмаған. Ошо хәлдә хәтерләп ҡалыуымдың төп сәбәбе - әлеге "бабай"ҙың беҙҙең яҡташыбыҙ булып сығыуы! Ҡалаларыбыҙҙың береһенән булған (фамилияһын яҙмайым) башҡорт егете. Дисбатҡа ике йылға хөкөм иттеләр. Икенсе бер осраҡта, республикабыҙҙың бер районынан әрмегә саҡырылған ауыл егете, үҙе "бабай" булып алғас, икенсе йәш һалдаттың ҡолаҡ пәрҙәһен яра һуҡҡан ине. "Нишләп улайттың?" тип һорағас, "Мине лә йәш саҡта ҡыйырһыттылар", тип кенә яуап бирҙе егет. Эште трибуналға еткермәй, егетебеҙҙе нисектер алып ҡалдылар. Бының менән яҡташтарымды яманларға теләмәйем. Ватандаштарым менән бәйле булмаған шундай ваҡиғалар, әлбиттә, бик күп булды. Тик әлеге беҙҙекеләр араһында ла бына шундай осраҡтарҙың булыу ихтималлығы хаҡында яҡташтарымды иҫкәрткем килә. Айырыуса "бабайлыҡтан" ҡурҡҡан атай-әсәйҙәрҙә.

Сираттағы ялға ҡайтҡанымда таныштарым аша ишеткән, үҙемдең хеҙмәт иткән ерем менән бәйле булмаған тағы бер ҡыҙыҡлы ла, ҡыҙғаныслы ла хәлде бәйән итеп китәйем әле. Республикабыҙ ҡалаларының береһенән булған йәш һалдат менән шул ҡала тирәһендәге бер ауылдан булған ҡарт һалдат тураһында. Әлеге ауыл егете - "бабай" үҙенең часына килеп эләккән яҡташын да ҡыйырһытыуҙан тартынмаған. Бер аҙҙан демобилизацияланып ҡайтып та киткән. "Дембель неизбежен как крах империализма", тигән әйтем йөрөй һалдат телендә. Йыл ярымдан әлеге ҡала егете лә өйөнә ҡайтҡан. Теге "хеҙмәттәшенең" ҡайһы ауылдан икәнен дә белгән был егет, дуҫ-иштәрен йыйып, бер нисә тапҡыр әлеге ауылға машина менән килеп, үҙенең ҡыйырһытыусыһын эҙләп йөрөгән, имеш. Алдағы көнөн уйлай белмәгән әлеге ауыл егете һәр саҡ унан йәшеренеп ҡалған. Бабайлыҡ ҡылғандарға ла ана шуның һымаҡ "контрсаралар" табылыуы ихтимал, тимәксемен. Башта иҫкә алып киткән, хеҙмәттәштәрен атҡан рядовой Фәләнов та, бәлки, ҡыйырһытыусыларынан үсен алғандыр...

Хөрмәтле ата-әсәләр, улдарығыҙҙы әрмегә оҙатҡанда һәр төрлө нәсихәттәрегеҙ менән бергә уларҙы бына ошо хаҡта ла иҫкәртеү кәрәк. "Миңә ефрейтор званиеһы бирҙеләр", тип улы яҙған хатты уҡыған әләсәһе: "Йәфрәйт булдым тип, балкауниктарынды әбижәйт итеп йөрөмә!" - тип хат яҙған һымаҡ. "Оло һалдат булып алғас, йәштәргә тырнаҡ осо менән дә тейәһе булма!" тип, улдарығыҙҙың иҫенә төшөрөп кенә тороғоҙ. Бына шулай.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

✔ ***Айырым иғтибарҙы Уран башҡорттарының шәжәрәләре менән стендтар йәлеп итте. Уларҙың ҡайһы берҙәре 14-се быуынға тиклем барып етә һәм яҡынса 450 исемдән тора.***



*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

**Уран тиһәң, күҙ алдына иң элек боронғо грек аллаһы Уран хөрмәтенә аталған планета килеп баҫа. Сөнки быға тиклем тарихты нисек тә булһа хәтерҙән юйып ташларға, онотторорға тырыштылар һәм мейегә дәреслектәрҙә бирелгән мәғлүмәт кенә тыҡҡыслап тултырылды. Әммә уран һүҙенең тамырына ҡараһаҡ, 13-сө быуатта төҙөлгән "Төрки-ғәрәп тәржемәсеһе"нә ярашлы, ул төрки этимологияһына барып тоташа һәм йылан тигәнде аңлата. Ибн Фаҙлан да үҙенең юлъяҙмаларында боронғо башҡорттарҙың бер төркөмөнөң йыландарға табыныуын яҙып ҡалдырған. Шуға күрә төрки күсмәндәренең бер төркөмө үҙенең атамаһын Уран тип алыуы ла ғәжәп түгел.**

# САЛАУАТТЫҢ ЯУҘАШТАРЫ -

## батыр урандар улар!

Монгол яуынан һуң уларҙың иҫән ҡалған өлөшө Башҡорт иленә килеп ултыра һәм башҡорт халҡы составына инә, һуңыраҡ айырым Уран олоҫон ойоштора. Башҡорттарҙың 40-тан ашыу ырыуын ҡарағанда уларҙың башҡа төрки халыҡтар составында ла булыуын күрергә мөмкин, әммә урандар - бары тик башҡорттарҙа ғына осрай. Бөгөн урандар Янауыл районының Ҡарман, Ҡарман-Аҡтау, Бәҙрәш-Аҡтау, Сәнгекүл, Кисәк-ҡайын, Ҡом, Вояды, Шишмә, Бәҙрәш, Тартар, Кесеҡор, Яңы һәм Иҫке Көйөк, Янбарис, Яңы һәм Иҫке Уртауыл, Янауыл, Булатйылға, Вәрәш, Эткенә, Яңғыҙнарат, Ташйылға, Аҡылбай, Туртыҡ, Ошья-Тау, Вәрәшбаш, Исхаҡ, Ҡыҙылъяр һ.б., Удмурт Республикаһының Камбарка районы ауылдарына тура килә.

13 февралдә Уран ырыуы йыйған ҡорҙа 13 ауылдан 77 делегат ҡатнашты. Сара ҡаланың Мәҙәниәт һәм күңел асыу үҙәгендә үтте. Йыйын ҡунаҡтарын башҡорт ғаиләләренең көнкүрешен сағылдырған күргәҙмәләр ҡаршы алды. Айырым иғтибарҙы Уран башҡорттарының шәжәрәләре менән стендтар йәлеп итте. Уларҙың ҡайһы берҙәре 14-се быуынға тиклем барып етә һәм яҡынса 450 исемдән тора. Оҫталар иһә ижад емештәрен - туҡыма, кейеҙ, ағас һәм таштан эшләнгән әйберҙәрен күрһәтте.

Ҡор уран ырыуы тарихына бағышланған театрлаштырылған тамашанан башланды. Рәсми өлөш алдынан йола буйынса башҡорттарҙың гимны - "Урал" көйө яңғыраны. Ҡунаҡтарҙы Янауыл районы хакимиәте башлыҡ вазифаһын башҡарыусы Салауат Ғилмиев сәләмләне. "Уҙған быуаттар осоронда беҙҙең район биләмәһендә төрки, славян һәм фин-уғыр халыҡтары бергә аралашып йәшәгән. Кешегә - айырым шәхескә, ғаиләгә, халыҡҡа - үҙ тамырҙарын белеү мөһим, тик шул саҡта ғына тыуған ер ҡиммәтерәк һәм ҡәҙерлерәк буласаҡ. Бөгөнгө сара быға яҡшыраҡ булышлыҡ итә", - тине Салауат Нәзир улы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов үҙенең сығышында Ҡоролтайҙың проекттарына туҡталды, башҡарылған һәм планлаштырылған эштәр хаҡында һөйләне. Шулай уҡ ғаилә тарихын, тыуған төйәк тарихын өйрәнергә саҡырҙы, сөнки глобаллаштырыу шарттарында үҙ тамырҙарыңды белеү генә халыҡтың үҙаңын һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәген аңлатты. Билдәле тарихсылар Салауат Хәмиҙуллин һәм Юлдаш Йосопов уран ырыуы тарихына ентекле туҡталды, съезда ҡатнашыусыларға башҡорт ырыуҙарының таралыу картаһын күрһәтте. Яҙыусы-сатирик, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары вәкиле Марсель Сәлимовтың ярым етди, ярым шаярып яһаған сығышы залды таң ғына йәнләндереп ебәрҙе. Яҡташтарына ҡунаҡҡа Башҡортостандың халыҡ артисы Фәнәүи Сәлихов та килгәйне. Ул Янауылда тыуып үҫкән, сығышы менән уран ырыуынан булған арҙаҡлы шәхес Радик Гәрәев тураһында хәтирәләре менән уртаҡлашты. Алғараҡ китеп әйткәндә, быйыл Радик Гәрәевҡа 65 йәш тулыр ине. Йыйын һуңында ҡабул ителгән ҡарарҙа уның исемен мәңгеләштереү инициативаһы ла урын алды.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары активисы, "Без башҡортлар" ойошмаһы рәйесе Радик Бәхтиевтың сығышы барыһының да күңеленә үтеп инде. "Бер нисә йыл элек бер кем дә беҙҙең телде башҡорт теле тип танымай ине. Ҡайһы саҡта, ата-әсәм мине башҡорт тип тәрбиәләп хаталанмаған микән, тигән уйҙар ҙа килә ине башҡа. Әммә бөгөн Башҡортостан ғалимдары ғына түгел, хатта Юлия Норманская кеүек Рәсәй филологтары ла төньяҡ-көнбайыш диалектын башҡорт теленең айырылғыһыҙ өлөшө, тип таныны. Шуға күрә хәҙер мин, бер кемдән дә оялмайынса, башҡорт телендә һөйләшәм", - тине ул.

Артабан һүҙҙе урандар алды. Район башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Рафаил Яхин әйтеүенсә, был инде урандарҙың икенсе съезы, сөнки беренсеһе 2013 йылда үткән һәм ул саҡта ырыу башлығы итеп Фәрит Миняҙев һайланған. Ул Фәрит Зыя улының төньяҡ-көнбайыш диалектын башҡорт теленең бер өлөшө тип таныу йәһәтенән әүҙем эшләүен билдәләне. Янауыл районы Тартар ауылынан тыуған яҡты өйрәнеүсе Светлана Хашимова ырыуҙаштарының Крәҫтиәндәр һуғышында Салауат Юлаев ғәскәрендә әүҙем ҡатнашыуҙары, уларҙың милли батырыбыҙҙың тоғро яуҙаштары булыуы тураһында бәйән итте. Башҡа делегаттар араһынан сығыш яһаусылар ғаиләһенең, ауылдарының тарихы менән уртаҡлашты, тамырҙарының быуаттар төпкөлөнән килеүен һәм башҡорт халҡына барып тоташыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Артабан ырыу Советы ағзалары һайланды. Гербты тикшергәндән һуң, уны Уран ырыуының билдәләрен ҡулланып, геральдиканың бөтә ҡанундарына ярашлы итеп эшләргә ҡарар ителде. "Байрам" ирҙәр халыҡ квартеты Руслан Мөхәммәҙиевтың Гөлсәсәк Тимершина шиғырына яҙған йырын башҡарҙы. Делегаттар һәм Совет ағзалары бер тауыштан уны уран ырыуының гимны сифатында раҫланы. Иң ахырҙа Ырыуҙар йыйыны штандартын тапшырыу тантанаһы үтте. Эстафетаны унлар ырыуы ҡабул итте һәм киләһе йыйын Ҡариҙел районында уҙасаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1838 йыл** - Өфөлә "Ырымбур губерна яңылыҡтары" гәзите сыға башлай. Ләкин ни бары ике ҡул станогы менән һәм шрифтар етешмәү сәбәпле, уны нәшер итеүе бик ауырға төшә. Шуға ла был баҫманың тәүге һаны бик шәптән булмай, 12 биттең 5-һе бер ниндәй тексһыҙ, буш сыға.

➔ **1838-1902** - Башҡортостанда йәшәгән һәм башҡорттар хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған Ф.Д. Нефедовтың ғүмер йылдары.

➔ **1839** - генерал-губернатор В.А. Перовский биш меңлек башҡорт ғәскәре менән Хиваға поход ойоштора, ләкин ул уңышһыҙ тамамлана, бик аҙ кеше кире әйләнеп ҡайта.

➔ **1840 йылдың июне - 1862 йылдың авгусы** - Әбделвәхит Сөләймәновтың мосолмандарҙың Диния назараты мөфтөйө булып эшләгән йылдары.

➔ **1841 йылдың 22 авгусы - 1907 йылдың 28 июне** - күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалим һәм шағир Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың ғүмер йылдары.

➔ **1841 йыл** - Ырымбурҙа Каруанһарай төҙөлеп бөтә. Төҙөләш башҡорт халҡынан йыйылған аҡсаға 1830 йылда башлана.

➔ **1842** - Император ғәли йәнәптәре герцог Максимильян Лейхтенбергский Ырымбур губернаһындағы Урал тау заводтарына килә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Бөтмәҫ дандары ҡалды

1942 йылдың август-сентябрь айҙарында дошман Брянск фронтында 8-се атлы корпус (112-се Башҡорт атлы дивизияһы ла ошо корпус составында һуғыша) оборона тотҡан рубежда өҫтөнлөк алырға тырыша, беҙҙең ғәскәрҙәрҙе артиллерия утына тота, танкылар һәм бронемашиналар ҡулланып, һөжүм итеп тора. Әммә беҙҙең яугирҙарыбыҙ ныҡ тора, дошманға ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеп, уның барса атакаларын кире ҡаға.

Сентябрь баштарында ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы хеҙмәтсәндәр исеменән бер төркөм командирҙар һәм һуғышсыларға боевой орден һәм миҙалдар тапшырылыуы айҡанлы дивизия яугирҙарына ҡотлау хаты менән мөрәжәғәт итә. Ошо хатта данлы яҡташтарыбыҙға башҡорт халҡының төп наказы - тыуып үҫкән ерҙәренә яуыз дошманды енеп ҡайтыу бурысы хаҡында иҫкә алына. Подразделениеларҙа йыйылыштар, митингылар уҙғарыла, мөрәжәғәттә яҙылғандар һәр яугирға еткерелә.

Тап ошо ваҡытта фронтта хәлдәр ҡатмарлаша бара. Немец армиялары Төньяҡ Кавказ һәм Сталинград йүнәлешендәге һуғыштарҙа өҫтөнлөккә өлгәшә, көсөргәнешлек көндән-көн көсәйә. 1942 йылдың 25 авгусында Сталинградта ҡамалыш хәле иғлан ителә, ә сентябрь урталарында ҡалала фашистар менән урам һуғыштары башлана.

Беҙҙең юғары хәрби командованиены көсөргәнешлектә тотоп, Ҡыҙыл Армияның хәрби көстәрен алдырғатыу маҡсатында дошман Брянск фронтында ла ҙур операциялар ойоштора. Сентябрь аҙағында 8-се корпустың 112-се Башҡорт һәм 55-се Алтай дивизиялары оборона тотҡан участкаһында фашистар көслө һөжүм башлай. Дошмандың хәл иткес ҡыҫымы беҙҙең дивизияның 294-се полкы позицияларына йүнәлтелә (ул саҡта майор Фәйзи Ғафаров - полк командиры, Хәйрулла Әхмәтов комиссар була). Дошман полкы атакаһында танкылар ҡулланыла. Әммә уларға корпус артдивизионы һәм 294-се полктың батареяһы ут аса. 294-се полктың 3-сө эскадроны (командиры - лейтенант Мәслих Шакирйәнов, политругы - Мирғәсим Ҡәйүмов) позицияларында алыш айырыуса ҡыҙа бара.

Беҙҙең миномётсыларыбыҙ мәргәнлеген күрһәтә - дошмандың пулемёт нөктәләре бер-бер артлы юҡ ителә. Уларға 275-се полктың ике эскадроны ярҙамға килә. Беҙҙең яугирҙар асҡан уттан ныҡ ҡырылған дошман баҙап, артҡа сигенә башлай. Уларҙы эҙәрлекләп барған яугирҙар Михайловка ауылы янына етҡәс, немецтар дзоттағы пулемёттан аяуһыҙ ут аса. Яугирҙар үтә ҡыйын хәлдә ҡала, пулялар ямғырынан баш күтәрерлек тә мөмкинлек ҡалмай. Был дзотты нисек тә булһа юҡ итергә кәрәк була. Ошо бурысты эскадрон политругы Мирғәсим Ҡәйүмов үтәй. Дошман дзоты янына шыуышып барып етеп, ике граната ташлай. Пулемёт тынып ҡала. Әммә эскадрон атаҡаға ташланыу менән пулемёт яңынан үлем сәсә башлай. Ҡәйүмов, дошман һис көтмәгән бер мәлдә, алға ынтылып, дзот амбразураһын күкрәге менән ҡаплай. Башҡорт азаматының иҫ киткес батырлығы - яуҙаштары ғүмере хаҡына үҙен ҡорбан иткән көн -1942 йылдың 29 сентябре була. Теүәл 5 ай үтеүгә икенсе бер башҡорт егете, документтарында үҙен Александр Матросов итеп таныҡкан Шакирйән Мөхәмәтйәновтың ошондай уҡ батырлығы бөтөн илгә билдәле була. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Мирғәсим Ҡәйүмовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелмәй. 4 сәғәт буйына барған үлемесле алыш башҡорт атлыларының еңеүе менән тамамлана. Һуғыш яланында фашистарҙың 150 мәйете, емертелгән 2 танкыһы һәм 6 автомашинаһы тороп ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Башҡортостандан ситтә йәшәү беҙгә "бына беҙ ситтә һәм милли мөхиткә мохтажбыҙ" тип мыжырға ла, бахырланырға ла сәбәп түгел. Үҙемде ситләтелгән, кемдәрҙәндер айырылған, етемләтелгән итеп тойманым.*

# АТАЙЫМ ТИМЕРЛЕГЕНДӘГЕ

## минең спортсы

**Эльбрус Ниғмәтуллин тигәндә, беҙ уның Рәсәйҙең иң көслө кешеһе икәнен дә һәм шул шәхестең башҡорт милләтенән булыуын да беләбеҙ. Поездарҙы, трамвайҙар составын, 1800 тонна тартҡан борамды (паром) күсереп йөрөтһөнмө, һауа шарын (аэростат) 2 минут 35 секунд эсендә туҡтатһынмы, 195 тонна тартҡан "Ан-124" самолетын 7 метр арауыҡҡа һөйрәтһенме, утыҙ тонналыҡ йортто урынынан күсерһенме, бер тонналыҡ дөйәне елкәһендә күтәрһенме (оҙайлы ваҡытҡа), икеһе ике яҡҡа сапҡан аттарҙы туҡтатһынмы (был трюкты әлегә бер кем дә эшләмәгән) - башҡорттоң ғына түгел, Европаның иң ғәйрәтле баһадиры Эльбрус Ниғмәтуллиндың күрһәткестәре быны менән генә сикләнмәй. Уның ҡайҙа ниндәй рекордтар ҡуйыуын, нисә тонна ауырлыҡ тартыуын һәм башҡа сығыштарын да күҙәтеп барабыҙ. Ә бына тормошта ниндәй кеше, ниндәй уй-хыялдар менән йәшәй һәм донъяны ҡабул итеү фәлсәфәһе ҡайһылайыраҡ икәнде белгәндәр һирәктер. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, башҡорт батырын һөйләшеүгә саҡырҙыҡ һәм әңгәмәне гәзит уҡыусыларға ла тәҡдим итәбеҙ.**

**Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарға беҙ йәлләү ҙә, һоҡланыу аша ла ҡарап өйрәнгәнбеҙ. Ситтә булғас, уларға ҡыйындыр, күңелһеҙҙер, ауырҙыр һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта уларҙың Башҡортостандағыларға ҡарағанда ла рухлыраҡ икәнлектәре һиҙелә. Ысынында ниндәй ул ситтә йәшәгән башҡорттар?**

- "Ситтә" тигән һүҙҙе шундуҡ алып ташлайыҡ. Территория яғынан беҙ республика эсендә түгел, әммә бер нисек тә "ситтә" лә түгел. Силәбе ерҙәрендә борон-борондан минең башҡорт ата-бабам йәшәгән, мин уларҙың төйәгендә тыуып үҫкәнмен. Башҡортостандан ситтә йәшәү беҙгә "бына беҙ ситтә һәм милли мөхиткә мохтажбыҙ" тип мыжырға ла йәки "беҙгә ярҙам кәрәк" тип бахырланырға ла сәбәп түгел. Бер ваҡытта ла үҙемде ситләтелгән, кемдәрҙәндер айырылған, етемләтелгән итеп тойманым. Олатай-өләсәйем, атай-әсәйем, туғандарым, ауылдаштарым араһында үҙ төйәгемдә, үҙ милләтем араһында үҫтем. Һәм бөтөн һеҙ атаған "ситтә" йәшәүселәр ҙә шулайҙыр тип уйлайым.

**Һеҙ башҡортса һөйләшәһегеҙме?**

- Күберәк русса һөйләшәм, әммә туған телемде яҡшы беләм. Мин үҙебеҙҙең Арғаяш һөйләшендә аралашып үҫкәнмен, башҡа төрлө диалекттарҙы белмәйем. Башҡортостанға килгәндә һәм башҡорттар араһында башҡортса аралашһам, йыш ҡына минең һөйләшемдең үҙҙәренекенән айырылыуы тураһында әйтәләр ине. Ҡайһы саҡ хатта әйткән һүҙҙәремдән көлөп ебәрәләр. Миңә ул ваҡытта егерме нисә йәштәр генә булғандыр, уңайһыҙланам да руссаға күсәм. Шул саҡта, әллә мин дөрөҫ һөйләшмәйем микән, тигән уй тыуа торғайны. Һәм миңә бер аҡыллы кеше: "Эльбрус, һин бик боронғо һөйләштә аралашаһың", - тип, күңелгә яҡшы уй һалды. Мин әйтәм: "Мин бит йәш, нисек итеп мин боронғо телде беләйем?"- тим. "Һинең телең боҙолмаған, үҙгәрмәгән, башҡа диалекттар менән ҡатнашмаған, әҙәбиләштерелмәгән, шуға ла боронғолоғонда таҙа һаҡланған",- тип аңнисек әйтелһә, бөгөн дә шулай һаҡлана.

**Һеҙ сит илдәрҙә, башҡа милләттәр араһында йәки фанаттарығыҙ менән аралашҡанда башҡорт икәнегеҙҙе белдерәһегеҙме?**

- "Мин - башҡорт" тип ҡысҡырып йөрөү дөрөҫ түгел тип иҫәпләйем. Асылда, минең башҡортлоҡто минең менән аралашҡан һәм минең спорт өлкәһендәге күрһәткестәрем менән ҡыҙыҡһыныусылар белә. Хатта ҡайһы бер украин, әрмән, немец милләттәре вәкилдәре лә минең милләтемә хөрмәт йөҙөнән, башҡортса өйрәнеп маташтылар. Сираттағы бер бәйгелә Канаданың иң көслө кешеһе Доминик Филиуҙы еңгәс, ул "Киләһе уйында Эльбрусты уның туған телендә сәләмләйәсәкмен!" тип вәғәҙә бирҙе. Былар барыһы ла кешене белергә теләгәндән, уның менән ҡыҙыҡһынғандан килә. Ә башҡаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн ниндәйҙер хеҙмәтең, уңыштарың булырға тейеш.

Бөгөн интернетта ла, башҡа ерҙә лә йәштәр "Мин - башҡорт" тигән лозунгыны алға ҡуя. Был, бер яҡтан, яҡшы күренеш, икенсе яҡтан, ундай һүҙҙе ҡысҡырыр алдынан үҙ милләтең өсөн нимәлер эшләргә кәрәк, тип иҫәпләйем. Йәштәргә, мәҫәлән, яҡшы уҡырға, сәләмәт тормош алып барырға, аң-белем өлкәһендә уңышлы булырға, яҡшы эшкә урынлашырға, матур ғаиләләр булдырырға һәм башҡалар. Ауылда эшһеҙ ятып, ара-тирә ниндәйҙер ғауғаларҙа ғына ҡайнашып, интернет аша нимәләрҙелер хуплап йә шелтәләп ятыу һинең башҡортлоғоңа файҙа килтермәҫ. Һин "Мин - башҡорт" тип ҡысҡырма, ә һине башҡалар "Бына ул, исмалатты ул. Шунан алып мин мине аңлағандай башҡорт, татар һәм башҡа төрки халыҡтар менән үҙ телемдә тартынмайынса һөйләшә башланым.

Ысынлап та, беҙҙең Арғаяш һөйләше урыҫ телләләр араһында ҡалып, көнкүреш кимәлендәрәк булып, консерва банкаға бикләнгәндәй хәлгә ингән. Боҙлоҡ аҫтынан шап-шаҡтай килеш мамонттар килеп сыға бит, шуның кеүек. Уға тыштан да, эстән дә йоғонтолар яһалмаған. Һүҙҙәр ата-бабалар заманында һам, башҡорт!" тип әйтерлек шәхес бул.

**Һеҙ үҫкән ғаиләлә ниндәй мөхит ине? Ниндәй тәрбиәүи алымдар, принциптар, мөнәсәбәттәр һеҙҙән бөгөнгө шәхесте формалаштырҙы икән тимен…**

- Мин Силәбе өлкәһе Сосновка районының Субары (Сыбар) ауылында тыуып үҫтем. Ауыл халҡы тулыһынса ауыл хужалығы менән шөғөлләнде, ян-яҡта йәйрәп ятҡан туғыҙ сәсеүлек яланы һәм уларҙа бөтөн төрлө культуралы үҫемлектәр ҙә сәселә ине. Иген, көнбағыш, ҡарабойҙай диңгеҙ булып тулҡынып ултырҙы. Бөтөн был баҫыуҙарҙа эшләүсе техника базаһы ла көслө булды. Әсәйем хеҙмәт юлын һауынсы булып башлаған. Унан иген ырҙынында, ферма лабораторияһында эшләне. Ә атайым ауылдың тимерлегендә тимерсе ине. Башҡа яҡтан да оҫта: йорттар төҙөнө, тимер сүкене, ағас эшен белде. Элек бит йорт-кәрәк ярағтарындағы тимер-томор һатыуҙа булманы, йәмкәнән, һоҫҡонан башлап халыҡ атайымдан эшләтеп ала ине. Бөтөн райондан уға киләләр, аттарын дағалатылар. Дағаларҙы ла ул үҙе ҡойоп яһай. Самауырҙан арбаларға тиклем алып киләләр, сиратка теҙелеп китәләр... Атайым өсөн был тимерлек ижадхана ине, ул унда илһамланып, ихласлап эшләй торғайны. Мин бәләкәйҙән үк шунда барып, атайымдың осҡондар сәселгән тимерҙе сүкеүен, уттан алып һыуға тығып, бер киҫәктән ниндәйҙер кәрәкле әйбер килтереп сығарыуын һоҡланып ҡарап ултырырға яраттым. Иң ҡыҙығы, ул бит быларҙы аҡсаға ла башҡарманы. Маҡтауға, аш-һыуға йәки хөрмәт, ярҙамсыллыҡ йөҙөнән эшләне. Бындай ҡылыҡ ғәҙәти ине ауылдаштар араһында. Бер саҡ башҡа балаларҙа велосипед күреп, атайымдан миңә лә һатып алып биреүен һорағас, ул уйланып торҙо ла, тәҙрә яңаҡтары эшләп һатты. Был уның шундай түләүгә яһаған тәүге тауары булғандыр әле. Шул ваҡыт аҡса күләмен тәҙрә яңаҡтары менән үлсәнем мин дә. Өс тәҙрә бер сәпитлек була, тип уйланым. Унан беҙ ул сәпитте күрше ауылдан барып алдыҡ. Биш йәшлек балаға ололар велосипеды алынды, башҡаһы юҡ ине. Тәүге йылда этәреп кенә йөрөттөм... Минең хыялымды тормошҡа ашырған атайымдың был бүләген бер ваҡытта ла онотмайым.

Минең шәхес булып формалашыуымда атай-әсәйемә ҡарағанда олатайым Ялалетдиндың йоғонтоһо ҙур булғандыр. Ул һуғыш ветераны булып, күпте күргән, күпте кисергән кеше ине. Хәтерләүемсә, һәр ваҡыт уның эргәһендә ултырҙым, ниндәйҙер әкиәттәрен, тарихтарын, мажараларын тыңланым. Ул күңелендәген миңә күсереп ҡалдырырға теләгәндер, моғайын, саҡырып алып, эйәртеп йөрөтөп һөйләшер ине. Бик изгелекле, шаян булды. Һуғыш хаҡындағы тарихтарында ла үлем, ҡанҡойош түгел, ә батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ, еңеүгә атлығыу ине. Шуға ла мин бала саҡ хәтирәләренән һуғышты батырҙар йыйылып, һабантуй үткәргән ялан кеүек итеп иҫләп ҡалғанмын. Һәм донъяла бер генә яуызлыҡ тигән нәмә бар, уныһы ла немецтар, тип ҡабул иткәнмен. Олатайым үҫкәнемде күтөп ала алманы. Әйләнә лә "Нисә йәш әле һиңә?" тип һорай торғайны. Мин "биш", "ете", "һигеҙ" тием. Шунан: "Армияға тиклем нисә йыл бар?"- тип һорай. Һанайбыҙ ҙа, "Эх, оҙаҡ шул" ти. Мине һалдат итеп күргеһе килдеме икән... Ун һигеҙем тулғанда китеп барҙы үҙе...

Мин мәүлит айында тыуғанмын һәм атайым Мәүлитдин тип ҡушырға булған. Баланың исем туйына йыйылғас, олатайым ҡапыл икенсе исем тәҡдим иткән. "Эльбрус" тигәндең нимә аңлатҡанын да төшөнмәгәндер инде унда күптәр, әммә олатайҙың һүҙенә ҡаршы килә алмағандар. "Ысын кеше буласаҡ ул!" тип исеменә аңлатма ла биргән ҡарт. Был исем менән мин бер ерҙә лә күләгәлә ҡала алманым. "Эльбрус?" тип аптырап һорайҙар. Унан хәтерләп ҡалмайҙар ҙа, бөтөн тауҙарҙы һынап сығалар: Казбек, Брюсли, Памир... Уйлауымса, бына ошо ят тау атамаһын ҡушыуҙарының да бер ғилләһе булғандыр, тим. Бәләкәстән башҡаларҙың төшөнә лә инмәгән ят шөғөлдәр, ят ҡыҙыҡһыныуҙар менән яндым...



**Ауылда, бер ниндәй шарттарһыҙ, ят спорт төрө менән шөғөлләнә башлауығыҙ ҙа, бәлки, шул исемгә бәйлелер…**

- Спорт менән мин бөгөн шөғөлләнәм. Ә ул саҡта әле "спорт" тигәндең "с" хәрефе лә юҡ ине. Бары гәзит-журналдарҙан күргән ауыр атлетика төрөнә әүрәнем генә. Башҡалар көрәшкә, ат сабышына, сәкән һуғыуға ылыҡһа, мин тимерлектән көсөм еткән тимер-томорҙо ташып алып, шуларҙы күтәреү менән шөғөлләндем. Тыйҙылар. Әммә мине нимәнәндер тыйыу ул, киреһенсә, теләгемде үҫтереү генә ул. Дәрестән ҡайтыуыма "спорт залым" туҙҙырылып, тимерҙәрем юҡ ителеп бөтөлгән булғанда ла, еңмешләнеп, киренән төҙөп, йыйып ала инем. Бер саҡ эскәмйәлә яһалма штангаларымды күтәреп ята инем, 10-15 килолыҡ тәгәрмәс ысҡынып китеп, маңлайымды йыртып сыйып төштө. Ҡойҡаныҡ ҡанай бит инде ул. Ҡанға батҡан мине күреп ҡалған өләсәйем ҡулындағы ҡомғаны менән йүгереп килеп башыма һыу ҡоя башланы. Яраға һыу тейгәйне, был тағы ла ярһыбыраҡ ҡанай башланы. Ҡанға һыу ҡу-

✔ **"Милләт өсөн" тип ғауға күтәреүселәргә ҡарағанда, милләтенең балаларын үҫтереүселәр уға күберәк файҙа килтерә. Бөгөн һуғыш ярҙам итә алмай, бөгөн киләсәкте дөрөҫ итеп, үҙебеҙгә кәрәккәнсә итеп ҡороп алыу отошлораҡ буласаҡ.**

# ТИМЕР-ТОМОР...

## ҡомарымды уятты

шылып, өләсәйем менән икебеҙ ҙә ҡып-ҡыҙыл булдыҡ. Нимәләр менән урап, саҡ баҫтыҡ. Оло ғауға сығып китте. Мине тағы ла ҡаты ғына тыйып ҡуйҙылар. Тик быныһы ла ваҡытлыса ғына булды. Ахырҙа, яҡындарым мине был юлдан кире бороуға өмөттәрен өҙҙө. Бөтөн балалар һымаҡ, ыңғайға йөрөр ҙә, хеҙмәт итеп ҡайтҡас, күрше ҡыҙына өйләнер, ауылда ҡалыр, иген сәсеп урыр, тигән өмөттәре аҡланманы.

Ҡалаға киттем, һөнәрселек училищеһына уҡырға индем. Тик был минең фекерҙәштәр эҙләп кенә сығыуым ине. Һәм таптым да. Башта йәшәгән ятағымдың спорт залында тренажерға йөрөнөм, унан "Атлет" клубына барып инеү юлдарын таптым.

**Һеҙҙең хыялығыҙ спортсы булыу инеме? Ниндәй маҡсат артынан атлыҡтығыҙ?**

- Минең хыялым, ысынында, егерь булыу ине... Кешеләр, хайуандар һәм тәбиғәт араһында, ҡайҙалыр урманда, күл эргәһендә йәшәрмен тип уйланым. Спортҡа ылығып киткәндә лә, аҙыраҡ шөғөлләнеп алам да, таныһығымды ҡандырғас, егерь булып сығып китәм, тип ысынлап пландар ҡорҙом. Тик ҡыҙыҡһыныуҙарым мине был өлкәгә ныҒыраҡ һөйрәне.

Ауылда уйнап үҫкән класташымдың әсәһе почтальон булды һәм улар өйөндә йөҙ төрлө гәзит-журналдар бүленеп таратыла ине. Дуҫым әсәһенә, мин дуҫыма ярҙам итәм. Һәм шунда ҡулыма "Совет спорты", "Рәсәйҙең спорт тормошо", "ЗОЖ" тигән үҙенсәлекле баҫмалар килеп эләкте лә инде. Был баҫмаларҙы үҙебеҙгә лә яҙҙырыуҙарын һорайым атайымдан. Ул заманда әле ауыр атлетика, штангылар, культуристар, карате һәм башҡалар илдә тыйылған спорт төрҙәре ине. Улар менән подвалдарҙа, йәшерен урындарҙа ғына шөғөлләнделәр. Былар Көнбайыштың музыкаһы, кинолары, кейемдәре кеүек үк ярамаған, насар йоғонто яһаусы нәмәләр тип иҫәпләнде.

Шул гәзиттәрҙең бер рубрикаһында уҡыусылар спорт буйынса үҙ уңыштары менән бүлешә, фекерләшәләр ине. Һәм мин, 15 биш йәшлек үҫмер, тот та шунда үҙ тәжрибәмде яҙ. Бер аҙна тирәһенән хат баҫылып сыҡты. Унда йүгереүем, һикереүем, граната ташлауым, күпме ауырлыҡ күтәреүем һәм башҡа үҙем өсөн бик юғары һымаҡ булған күрһәткестәрем теҙелгәйне. Ул йәштә мин ысынлап та иң юғары уңыштарға өлгәшкәнмен икән тип уйлай инем. Һәм, дуҫтар, әгәр һеҙ минең кеүек булырға теләһәгеҙ, хат яҙығыҙ, бына минең адресым, тип өҫтәп ҡуйғанмын. Бына миңә хаттар яуа башламаһынмы! Йәшник-йәшник хаттар алып килә почтальон. Класташымдың әсәһе хәҙер инде уларҙы рәшәткә араһына ҡыҫтырып китә алмай, хатта күтәреп ташый ҙа алмай, үҙемә килеп алырға ҡуша. Ауыл гөж итте: Эльбрусҡа нимә булған? Ул нимә эшләгән? Ә мин хаттар уҡыйым. Уҡып һәм яуап яҙып өлгөрә алмайым. Йылдан ашыу ваҡыт килде был сәләмдәр. Арыным, ялҡтым һәм яуапты ла ҡыҙҙарға ғына яҙа башланым. Ә ҡыҙҙарҙан хат килеүе айырыуса бер ваҡиға ине. Мин ауыл малайы, ҡыҙҙар менән яҡшылап аралашҡаным да юҡ. Шуға ла ҡыҙҙарҙың хаттарын ҙур иғтибар менән уҡып, ихлас яуап бирҙем.

Хаттарҙа нимә яҙылған ине? Уларҙың күп өлөшөн минең кеүек балалар яҙған, нисек итеп күнекмәләр башларға, нимәләр менән шөғөлләнергә һәм башҡалар. Армиянын ҡайтырға йөрөгән егеттәр яҙған. Йәнәһе, улар физик көс туплап ҡайтырға теләй. Минән олораҡ булған һәм тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәргә өлгәшкәндәр ҙә яҙа. Былары мине айырыуса ҡыҙыҡһындыра. Шуларҙың бер нисәһе, мәҫәлән, Украина, Литва, Беларусь егеттәре менән оҙаҡ хат алыштым. Беҙҙә яңы башланған спорт төрҙәре уларҙа күптән ҙур залдар йыя һәм улар беҙҙән бер-ике аҙым алда бара ине. Мин бына ошо тиңдәштәрем менән ярыша башланым. Улар күрһәткестәрен яҙа ла, ике аҙна тирәһенән хаттарын алып уҡыйым һәм үҙ күрһәткестәремде шул кимәлгә еткерергә тырышам. Шулай итеп, мин үҙем шөғөлләнгәндең Хоҙай ҡушмаған нәмә түгеллеген һәм уның менән минең кеүек меңәрләгән йәштәр ҡыҙыҡһыныуын аңланым. Икенсенән, мин ауылда йәшәйем, минең шарттарым, тренерым, уҡытыусым юҡ, тип, күктән ярҙам көтөп ултырмаҫҡа икәнде лә төшөндөм. Минең кеүек меңләгән бала шулай уҡ берәүҙән дә көтөп ултырмай икәнен күрҙем. Был минең өсөн бер стимул, үрнәк ине.

**Рекорд артынан рекодҡа ынтылыу - ул спортсы азартымы, әллә бөгөнгө уңыштарың менән ҡәнәғәт булмай, тағы ла юғарыраҡҡа ынтылыумы? Был рекодтарҙың сиге булырға мөмкинме?**

- Мин һәр ваҡыт булғаны менән ҡәнәғәтмен. Үҙемдең уңыштар, күрһәткестәр менән риза булмай, тешләнеп, көйөп йөрөгәнем юҡ. Нимәгәлер өлгәшһәм, уны шундуҡ башҡаларға ла күрһәткем, бүлешкем, уларҙы ла өйрәткем килә. Хатта миңә артыҡ ихлас булмаған, зыян килтергәндәрҙән дә йөҙ бора алмайым. Бына был минең башҡортлоғом инде. Күп осраҡта ошо яғымды контролдә тоторға тип уйлайым, әммә булмышыңдан ҡасып булмай икән.

Күрһәтелгән рекодтар - улар минең оҙайлы уңышһыҙлыҡтарымдан өйөлгән тауҙарым ул. Һәр уңыш артында ентекле хеҙмәт, көс, энергия, сәләмәтлек һәм рухи һынылыш ята. Уңыш ул һауанан төшә торған әйбер түгел. Бигерәк тә спортта. Әммә мин бер ваҡытта ла кире сигенмәнем, берәүгә лә бәлә һалманым, берәүҙән дә ярҙам көтмәнем һәм кемдәрҙер миңә иғтибар итергә тейеш икән тип тә өмөтләнмәнем. Минең быҒаса тренерым да булманы һәм юҡ та.

Журналистар аҙыраҡ арттырып ебәрә баҫмаларҙа: мин олимпия чемпионы түгел, ерҙең иң көслө кешеһе лә түгел, әммә үҙаллы шөғөлләнеп, Рәсәйҙән Ерҙең иң көслө кешеһе турнирына беренсе булып үткән кеше. Командаһыҙ, бер үҙем, ауылда, бүрәнәләр, беларусь покрышкалары, ағас гранаталар менән әҙерләнеп. Кешенең мөмкинлектәре сикһеҙ. Унын теләге, ынтылышы бар һәм ошоноң өҫтөндә эшләй икән, уға юлдар асыла. Әммә һин ябай кеше икәндә лә оноторға ярамай. Һиңә ниндәйҙер, башҡаларҙа булмаған сифаттарҙы, мөмкинлектәрҙе, һәләтте Аллаһы Тәғәлә бирә һәм тартып алырға ла мөмкин. Шуның өсөн сама белергә кәрәк. Минең рекордтарҙың был һуңғыһы түгел...

**Башҡорт егеттәренә милли спорт төрҙәре генә уңайлы, барымлы һәм улар ошо өлкәлә генә уңышҡа өлгәшә ала, тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

- Юҡ, килешмәйем. Ундай сиктәргә бикләнергә, билдәле генә сиктәр ҡуйырға ярамай. Сәләмәтлегеңә зыян килтермәҫтәй, һинең мөмкинлектәреңә ярағандай һәр спорт менән дә шөғөлләнергә һәм унда оҫтарырға була. Бына мин буйға бәләкәй, көсөм дә алпамышаларҙыҡы түгел. Шуның өсөн бөтә нәмәне лә уйлап, алдан һыҙмалар менән сығарып алып, ауырлыҡ үҙәген билдәләп, уны нисегерәк күтәреү, шылдырыу схемаларын төҙөп алып башҡарам. Беләк көсөнә генә ышаныу - ул ахмаҡлыҡ. Сит илдәрҙәге, сит өлкәләрҙәге спортсылар мине "Хәйләкәр башҡорт" тип атаны әлеге шул отҡорлоғом өсөн. Сит илдәргә сығыу өсөн минең спонсорым, тренерым, маркетологым һәм башҡа белгестәрем булманы. Ғәҙәттә, спортсылар өсөн уның ярҙамсылары уйлай, эшләй, ҡайғырта. Бындай осраҡта хатта аңраланып, бары тик "суҡмар" булып ҡына ҡалырға мөмкин. Миңә иһә үҙемә төрлө алымдарҙы уйлап табырға, сит телдәрҙе өйрәнергә, осһоҙораҡ варианттарҙа ярыштарға әлегеү юлдарын уйлап табырға тура килде. Шулай итеп, был бөтөнләй ят булған спорт төрөндә мин үҙемде үҙем яһаным. Һәм был һәр егеткә, һәр ҡыҙға мөмкин булған хәл.

**Бөгөнгө башҡорт йәмғиәтенең йәшәйешен күҙәтеп бараһығыҙҙыр. Нимәләрҙер өсөн борсолаһығыҙмы?**

- Халыҡтың тыныслыҡ таба алмауы һағайта... Йәмғиәттә ябай халыҡты сәйәсәт тулҡыны менән алып китергә тырышҡандар, агрессорҙар күбәйҙе. Йәштәр тотоп нимәлер эшләргә, ниндәйҙер өлкәләрҙә уңыштар яуларға һәм башҡаларҙы үҙ артынан эйәртергә ынтылмай. Данды улар бөгөн интернет аша оран һалыуҙар, власты әрләүҙәр, комментарийҙар аша бер-береһен һүгеүҙәр аша яулайбыҙ икән тип уйлай. Тик хеҙмәтһеҙ һәм нигеҙһеҙ бер нәмә лә булмай.

Бына мин бөгөнгө исемемә утыҙ йыл килгәнмен. Ә бит башҡаға башым етмәгәндән йәки башҡа һөнәрем булмағандан түгел. Һөнәрем буйынса төҙөүсемен, бына тигән итеп төҙөлөш алып бара алам, тимер эшен дә беләм. Физика, химия фәндәрен яҡшы үҙләштерҙем, был белемем бөгөн дә ярҙам итә. Әлеге билдәлелегемдә файҙаланып, сәйәсәткә лә йәки башҡа ағымға ла тығылып китә алам. Шулай уҡ майҙанға сығып, "ер минеке", "бында мин хужа" тип ҡысҡыра алам. Тик мин был юлды һайламайым. Ҡайҙалыр йәштәрҙе өйрәтеүҙе, сәләмәт тормошҡа, спортҡа ылыҡтырыуҙы, рухтарын нығытыуҙы, йәшәйештә дөрөҫ йүнәлеш тота белеүҙе һәм башҡа үҙем белгәндәр менән бүлешеп көн итеүҙе өҫтөнөрәк күрәм.

Йәштәргә нимә әйтер инем? Һеҙ үҙегеҙҙе ниндәйҙер төркөмдә күреп, төркөмдә көс икән тип уйлап, яңылышмағыҙ. Яңғыҙығыҙ шәхес булараҡ кем буласағығыҙҙы баһалағыҙ. Төркөм булып ҡысҡырышырға, төркөм булып абаларға барыһы ла булдыра, ә бер үҙегеҙ, Башҡортостандан ситтә, сит халыҡ араһында, сит илдәрҙә һеҙ кем? Башҡаларға һеҙ кем булып күренә алаһығыҙ һәм улар һеҙҙе кем итеп ҡабул итә? Бер урында ғына үҙ һутығыҙҙа ҡайнап, бер нәмәгә лә өлгәшмәйенсә, кемдәрҙәндер нимәләрҙер талап итеп, кемдәрҙер һеҙгә һеҙ ошо ерҙә тыуған өсөн генә бурыслы тип уйлап йәшәү хата. Һеҙҙең ғүмерегеҙ ошо мәғәнәһеҙ талаштартыштарҙа үтеп тә китәсәк - шул ғына. Иң беренсе һәр кем үҙенең эске донъяһына ҡараһын, ундағы потенциалын самалаһын һәм булдыра алғаны менән булһын: йырлаһын, бейеһен, ижад итһен, дауалаһын, уҡытһын һәм башҡалар. Хеҙмәтһеҙ, тырышлыҡһыҙ, белемһеҙ, маҡсатһыҙ булыу деградацияға алып килә. Бындай быуын киләсәген дә тәрбиәләй алмаясаҡ. "Милләт өсөн" тип туҡтауһыҙ ғауға күтәреүселәргә ҡарағанда, милләтенең балаларын үҫтереүселәр уға күберәк файҙа килтерә, тип уйлайым. Бөгөн һуғыш ярҙам итә алмай, бөгөн киләсәкте дөрөҫ итеп, үҙебеҙгә кәрәккәнсә итеп ҡороп алыу отошлораҡ буласаҡ.

**Эскелеккә ҡарашығыҙ нисек?**

- Эскелек менән ҡыҙыҡһынмайым, битарафмын. Спортсы булған өсөн генә түгел. Күп кенә эскән спортсыларҙы ла, чемпиондарҙы ла беләм. Бала сағымдан эскелек өлгөләре, мәҫәлән, атайымдың эскән осраҡтағы ҡылыҡтары хәтеремдә кире күренеш булып уйылып ҡалған. Мин уның эскәнен яратманым, бынан ғаилә, әсәйем яфаланды. Артыҡ мауыҡҡан кеше булмаһа ла, мин шул күҙәтеүҙәремдән генә сығып та, бәләкәйҙән үк яҡындарыма ундай зыян килтермәйәсәкмен тигән ҡарарға килгәйнем. Һәм шулай булды ла.

Эсеп ятып та чемпион була алған спортсылар бар ул. Тик мин ундайҙарҙан түгел. Спиртлы эсемлек миңә бик насар тәьҫир итә. Бөтә башҡорттарға ла шулайҙыр был. Беҙҙең булмыш эскелеккә яраҡлашмаған. Ярамай беҙгә эсергә, бөтөнләй ярамай.

**Спорт, спорт, спорт... Ә мөхәббәткә, ҡыҙҙарға урын булдымы һеҙҙең тормошта?**

- Мин ҡыҙҙар темаһына бик һуң килдем. Ул яҡтан һуң өлгөрҙөм. Ауыл малайына хас оялыу, уңайһыҙланыу, ҡырағайлыҡ булды. Үҙем ҡартайып өйләнешкән атай менән әсәйҙең балаһы инем. Атайыма 46, әсәйемә 36 булған мин тыуғанда. Бала саҡта ни өсөн башҡаларҙың әсәләре йәш тә, минеке оло икән тип аптырай торғайным. Бер туған апайым тормошҡа иртә сыҡты, ә мин һуңыраҡҡа ҡалдым.

Спортҡа ныҡлап тотонғас, бөтөн уйым шул хаҡта ғына булды. Халыҡ-ара карьерам башланғанда миңә егерме ете йәш ине. Шул арала бер ҡыҙ менән мауығыу булды, әммә эш ғаилә ҡороуға барып етмәне. Унан инде минең илдәр буйлап сәйәхәттәр, етди ярыштарға әҙерләнеүҙәр китте һәм бер урынға ерегеп кенә ултырыу килеп сыҡманы. Үҙең шулай һауала йөрөгәндә ниндәй ҡатын-ҡыҙға ғаилә йөгөн йөкмәтеп китергә була? Был мөмкин булмаған хәл ине.

Әсәйем ауыр кисерҙе минең өйләнмәүемде. Мин уның өсөн, бәлки, бөтөнләй аңлайышһыҙ нәмә менән булышып, аңлайышһыҙ йәшәйеш алып барған ул булғанмындыр инде. Әллә ҡайҙан Европанан ҙур еңеүҙәр, аҡса, дан менән ҡайтып торһам да, уны был артыҡ ҡыуандырманы. Уға килен һәм ейәндәр кәрәк ине. Ярай, ул был теләген күреү бәхетенә өлгәшеп ҡалды. Һуңлап булһа ла өйләндем, ике балам бар.

**Хәҙер һеҙ Башҡортостанда йәшәйһегеҙ, шулай бит?**

- Эйе, хәҙер мин бында. Башҡортостан йәштәрен спорт нигеҙендә тәрбиәләү өлкәһендә хеҙмәт итәм. Башҡортостан етәкселегенең, спортсыларының, йәш быуындың миңә ышаныс белдереүе һәм яуаплылыҡ һалыуын юғары баһалайым. Уңайҙан файҙаланып, балалар, йәштәр өсөн иғлан яһайым: әйҙәгеҙ, килегеҙ, өйрәнегеҙ, шөғөлләнегеҙ, һеҙгә түләргә, нимәлер һатып алырға кәрәкмәй. Мин һеҙҙең менән шөғөлләнергә әҙер.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Минеңсә, белемле булыу яҡшыраҡ, сөнки "байлыҡ - бер айлыҡ", тип ололар юҡҡа әйтмәгән. Байлығың булып та, белемең булмаһа, булған байлығыңды өс көндә юҡҡа сығарырға ла мөмкин.*



ӘЙТӘГҮР!

**Беҙ йыш ҡына ир-егеттәр донъяһына ҡағылышлы төшөнсәләр тураһында оло, йәки инде был тормошта ниндәйҙер ҡаҙаныштарға өлгәшкән уҙамандар менән һөйләшергә күнеккәнбеҙ. Ә бит ир-егетте тәрбиәләү асылда уның бала сағына һәм үҫмерлек осорона ҡайтып ҡала. Бына шуны күҙ уңында тотоп, тап Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатының үҫмер егеттәре менән әңгәмәләштек.**

# БЕЛЕМЛЕ БУЛЫУ ОТОШЛОРАҠ,

## ти гимназия-интернат уҡыусылары



**➔ Илһөйәрлек тигәндә нисек аңлайһығыҙ?**

**Искәндәр Ғарипов:** Яратыу төрлөсә булырға мөмкин. Мәҫәлән, "Мин яратам" тип әйтергә генә һәм әйтмәйенсә лә күп яҡшылыҡтар ҡылырға була. Шуның кеүек, илһөйәрлек - ул үҙ иленә, халҡына йылы хис белдереү генә түгел, ә илендәге бөтөн булған тереклекте һаҡлау, халҡыңдың үткән тарихын һәм мәҙәниәтен белеү, бөгөнгөһөн ҡайғыртыу ул. Илһөйәрлек - ниндәйҙер унайлы һәм уңышлы юлды һайлау өсөн милләтеңә хыянат итмәү, йәғни тоғролоҡ. Илһөйәрлек - ул шулай уҡ иленә кәрәк булғанда ғүмереңде лә йәлләмәү.

**Рәсүл Ғазаҡов:** Илһөйәр кешеләр - улар батырҙар. Бары тик йөрәктәрендә илһөйәрлек булғандар ғына милләте өсөн, иле өсөн ҙур эштәргә бара. Мәҫәлән, шуларҙың береһе Шайморатов генерал. Ул беҙҙең халыҡҡа батырлығы, аҡылы, хәрби оҫталығы һәм илһөйәрлеге менән дан алып килгән кеше. Илһөйәрлек халҡыбыҙ ҡомартҡыларын, ауыҙ-тел ижадын, мәҙәниәтен, фольклорын һәм башҡа байлыҡтарын ҡулланып ҡына йөшәү түгел, ә иленә үҙеңдә файҙа килтереү, тоғролоҡ һаҡлау.

**Азамат Зәйтүнов:** Илһөйәрлек - ул Тыуған иленде яратыу тойғоһо. Ул - Ватанға бар булмышың менән бирелгәнлек. Был тойғо беҙгә атай-әсәй, олатай-өләсәйҙәр тарафынан, уратып алған мөхит аша һалыналыр, тип уйлайым. Башҡорт халҡы борон-борондан үҙенең илен, ерен, телен яҡлаған, һаҡлаған, кәрәк саҡта яуға күтәрелгән. Йөнен-тәнен аямай һуғышҡан, бер ҡасан да сигенмәгән. Былар барыһы ла илде ныҡлы һөйгәндән генә була.

**Батырйән Мифтахетдинов:** Илһөйәрлек ул ғаиләнде яратыуҙан, өйөндә, ҡапҡа алдын, урамыңды, ауылыңды, ҡалаңды һағына белеүҙән башлана. Һин шул яҡын нәмәләрҙе үҙеңдеке итеп ҡабул иткәнһең. Шулай уҡ тыуған илде лә үҙеңдеке итеп яҡын күрергә һәм уны һаҡларға, ҡыҙғанып торорға, ҡәҙерләргә кәрәк. Барыһына ла ишек асып, халҡың ерен, мөлкәтен талатып ҡуйыу, туҙҙырыу ул киң күңеллелек түгел, ә моңһоҙлоҡ. Илһөйәрҙәр ерен, милләтен ҡурсалай белә.

**➔ Армия хеҙмәтенә барасаҡһығыҙмы?**

**Искәндәр Ғарипов:** Армия сафында хеҙмәт итеү һәр ир-егеттең бурысы тип һанайым. Был үҙе бер тормош мәктәбе лә. Армиянан егеттәр етдиләнеп, үҫеп ҡайталар. Хеҙмәт төрлө ерҙәрҙә үтә, илдәр күрәләр, сит милләттәр менән дуҫлашалар, ауырлыҡтарҙы үтеп өйрәнәләр. Быны мин ағайымдарға ҡарап әйтә алам. Хеҙмәттә булғандар ата- әсә, тыуған ерҙең ҡәҙерен белеп, һағынып ҡайталар. Бөгөн хеҙмәт итеү хәүефле, тиһәләр ҙә, был тормош һынауын ир-егеттәр үтергә тейеш.

**Рәсүл Ғазаҡов:** Әйе, мин армия хеҙмәтенә барасаҡмын. Илебеҙҙе беҙ һаҡламаһаҡ, кем һаҡлар? Әгәр олатайҙар Бөйөк Ватан һуғышында ғүмерҙәрен йәлләмәй һуғышмаһа, бөгөн беҙ кем булыр инек? Бөгөн килеп беҙ шул бурыстан баш тартайыҡмы? Юҡ! Хәрби хеҙмәт юлы үтеү мотлаҡ.

**Азамат Зәйтүнов:** Армия хеҙмәтенә, әлбиттә, барасаҡмын. Хәрби хеҙмәт үтмәйһең, ҡулыңа ҡорал да тота белмәйһең икән, һуғыш-фәлән башланһа, нишләйһең? Ҡатын-ҡыҙҙар һинән бергә боҫоп ултыраһыңмы ни? Унан бит, ир-егеттәр араһында "Хеҙмәт иттенме?" тигән һорау бар. Шул саҡта горурлыҡ менән "Эйе" тип әйтерлек булһын.

**Батырйән Мифтахетдинов:** Бөгөн армияла хеҙмәт итмәгән егеттәрҙе етәкселек вазифаһына ла эшкә алмайҙар. Был бик дөрөҫ, тип уйлайым. Илен һаҡлау бурысына яуапһыҙ ҡараған егет нисек итеп тотош коллектив өсөн яуап бирә алһын? Әрме сафына, һис шикһеҙ, барасаҡмын. Был минең өсөн намыҫ эше. Әлбиттә, бөгөн күп әсәйҙәр улдарын хеҙмәткә ебәрмәҫкә тырыша, тик егеттәр быны үҙҙәре хәл итергә тейеш, атай-әсәйҙәренең артына йөшеренеп ҡалыу ярамай. Хәрби хеҙмәт хәүефле булғанда ла ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Егеттәргә ҡурҡыу килешмәй.

**➔ Рухлы башҡорт егетенә ниндәй сифаттар хас?**

**Батырйән Мифтахетдинов:** Рухлы кеше милләтенең мәҙәниәтен, тарихын, бөгөнгө йәшәйешен йөрәгендә йөрөтә. Ул башҡорт концерттарына йөрөй, башҡорт әҙәбиәтен уҡый, милли проекттарҙы күтәреүҙә булышлыҡ итә һәм башҡалар.

**Искәндәр Ғарипов:** Рухлы егеттең көсө беләгендә түгел, ә йөрәгендәге ҡыйыулығында, ныҡышмаллығында, аҡылында, итәғәтлегендә, белемендә... Мин үҙемдә лә ошо һыҙаттарҙы тәрбиәләргә тырышам.

**Рәсүл Ғазаҡов:** Рухлы башҡорт - ул тыуған иле, ере, туғандары өсөн йәнен бирергә әҙер булған егет. Уның физик яҡтан көслө булыуы ғына аҙ, ә уй-тойғолары төплө, күңел донъяһы яҡты, рухы ла ныҡ булырға тейеш. Рух ныҡлығы беҙгә атай-әсәйҙән, нәҫелдән күсә, тәрбиәнән килә. Башҡорт егеттәрендә рух һүнмәһә - илебеҙ ҙә сәскә атыр.

**Азамат Зәйтүнов:** Рухлы башҡорт егете туған телен, тарихты, үҙенең тамырҙарын белергә, шул телдә аралашырға, фекер йөрөтөргә, илен, ерен, халҡын яратырға, хөрмәт итергә, халҡы менән ғорурланырға тейеш. Юҡҡа ғына халыҡ "Рух һүнмәһә - ил һүнмәҫ" тимәгән. Әгәр башҡорт егеттәре ошо бар сифаттарға ла эйә икән, тимәк, беҙҙең илебеҙ үҫешәсәк, нығынасаҡ, халҡыбыҙ йәшәйәсәк.

**➔ Белемле булыу отошлораҡмы, әллә бай булыуымы?**

**Рәсүл Ғазаҡов:** Минеңсә, белемле булыу яҡшыраҡ, сөнки "байлыҡ - бер айлыҡ", тип ололар юҡҡа әйтмәгән. Байлығың булып та, белемең булмаһа, булған байлығыңды өс көндә юҡҡа сығарырға ла мөмкин.

**Искәндәр Ғарипов:** Байлыҡ - бер айлыҡ , ә белем - ғүмерлек. Бай булып та белемең булмаһа, ер йөҙөндә йәшәүҙең мәғәнәһе юҡтыр. Белемле кеше бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмай. Шуның өсөн төплө белем алырға кәрәк.

**Батырйән Мифтахетдинов:** Белемле кеше иленә лә, халҡына ла файҙалыраҡ була ала. Байлыҡ ул нәфселе була һәм байҙарҙың ниндәйҙер фәнни асыштар яһауын, китаптар яҙыуын, яңы техникалар уйлап сығарыуын ишеткәнебеҙ юҡ әле. Быға белемлеләр генә һәләтле.

**Азамат Зәйтүнов:** Әлбиттә, белемле булыу яҡшыраҡ. "Белемле кеше юғалмаҫ" тигән халыҡ мәҡәле бар. Ысынлап та, әгәр белемең булһа, һин бер ҡасан да юғалмаясаҡһың. Белем - ул үҙе ҙур байлыҡ, тип уйлайым. Илебеҙ тап белемле, алдынғы ҡарашлы йәштәргә таяна.

**➔ Малайҙарҙа ысын ир-егетлек сифаттарын кем тәрбиәләй?**

**Искәндәр Ғарипов:** Ысын ир-егет булып үҫеүгә булышлыҡ итер кеше, беренсе сиратта, әлбиттә, атай. Һәр хәлдә, беҙҙең ғаиләлә шулай. Шуның өсөн ир балаларҙы атайлы итеп үҫтерергә тырышырға кәрәк, тип уйлайым.

**Рәсүл Ғазаҡов:** Ысын ир-егетлек сифаттары ғаиләлә тәрбиәләнә, тип уйлайым. "Атайҙан күргән - уҡ юнған, әсәйҙән күргән - тун бескән", ти бит халыҡ мәҡәле. Шулай уҡ ир-егеттең үҙенән дә күп нәмә тора. Әгәр төҫкә-буйға матур булып та, рухи көсөң, яҡты уйҙарың, яҡшы ниәттәрең, иленә мөхәббәтең юҡ икән, һин ниндәй ысын ир-егет булаһың инде!

**Батырйән Мифтахетдинов:** Ысын ир-егетте ғаилә үҫтерә. Яңғыҙ әсәйҙәр ҡулында ла үҙҙәренә ирҙәр яуаплылығы алып үҫкән малайҙарҙы беләм. Артыҡ иркәләгән, барыһын да ата-әсәһенән эшләткән, комфорт зонаһында булыуҙы ғына хуп күргән балаларҙан ир-егет сыҡмаҫ. Шунлыҡтан, малайҙарҙы баҫмаҫҡа, алдына аныҡ маҡсаттар ҡуйып, шуларға өлгәшеп йәшәргә өйрәтергә кәрәк.

**Азамат Зәйтүнов:** Ысын ир-егет булып үҫеүгә ғаиләлә нигеҙ һалына, сөнки беҙ үҙебеҙҙең атайҙар, олатайҙар, ағайҙарға оҡшарға тырышабыҙ. Уларҙан өлгө алабыҙ. Шулай уҡ гимназияла ла беҙҙе ысын ир-егеттәр итеп тәрбиәләүгә ҙур көс һалалар. Тәртипле, ныҡышмал, яуаплы булырға, бөхтә кейенеп йөрөргә һ.б. өйрәтәләр. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигәндәй, беҙ әлеге мәлдә ҡурайҙа уйнарға өйрәнәбеҙ, милли көрәш менән дә шөғөлләнәбеҙ. Ғөмүмән, ысын ир-егет ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа, ҡыйыу, тәүәккәл, тырыш булырға, әйткән һүҙендә тора белергә, һәр эшкә яуаплы ҡарарға тейеш, минеңсә...

Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА
әңгәмә ҡорҙо.

**✓ Ауыл ир-атының үҙ сәләмәтлеге тураһында уйларға ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Тәбиғәт үҙе ауыл ир-атын сәләмәт итеп яралта, сөнки тап ҡала кешеһе уның арҡаһында йәшәй, үҙ һаулығын ҡайғырта.**



ХӘТЕРКИТАП

# ҒҮМЕРЛЕК ҺАБАҠ

**Был көндәрҙә бынан 20 йыл элек, 2001 йылдың 9 ғинуарында арабыҙҙан киткән юрматы ере арыҫланы, мәҫәлсе-шағир, журналист Сулпан ағай Иманғоловты хәтерләп, уның менән бәйле бер ваҡиғаны иҫкә алып ултырҙым әле. Һеҙгә лә һөйләйем.**

Уның менән Башҡортостандың көньяғында беҙ булмаған төбәк-ауыл бик һирәк ҡалғандыр. Ул Башҡортостан радиоһы хәбәрсеһе булып эшләгән мәлдә репортаж артынан ауылдарға йыш сыҡтыҡ. Сулпан ағайҙың ябай ғына кеше тураһында материал әҙерләгәндә лә унан нисек мәғлүмәт алыуына аптырап, һоҡланып ҡарап ултыра торғайным. Респондентҡа бер үк һорауҙы төрлө яҡлап бирә, тейешле яуап алғас ҡына төп темаға кире ҡайтып, репортажды дауам итә ине. Уның менән халыҡ араһына сығыуҙарҙың бушҡа булмауын редакцияға эшкә килгәс кенә аңланым. Ошондай бай тормош юлы үткән, журналистика өлкәһендә тәжрибәле кешенең Мәләүез районында үҙаллы башҡорт гәзите сыға башлағанда арабыҙҙа булмауы бик тә үкенесле ине. Ҡайһы саҡ ишек асылып китер ҙә, Сулпан ағай йылмайып килеп инеп: "Әмиров, әйҙә бер ҡыҙыҡ яһайыҡ, әйҙә, гәзиттә ошо мәҡәләне баҫайыҡ әле", - тип әйтер кеүек була торғайны.

Миненсә, тормошта бөгөн дә мәҫәлсе өсөн темалар етерлек. Сулпан ағай әйтмешләй,



Рәсәйҙәге кеүек тормош барҙа, мәҫәлсе эшһеҙ ултырмаҫ, сөнки әҙип үҙ әҫәрендә темаларҙы көндәлек тормоштан ала. Берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булһаҡ, был хаҡта фекеремде һорап, һуңынан үҙенсә баһа бирер ине. Ул нисек тиҙ арала ошо ваҡиға геройҙарын йәнләндереп менән сағыштырып өлгөргәндер, аптырайым. Сулпан ағайҙың бер нисә секунд эсендә ҡарар ҡабул иткәненә һәм уның уғата ла дөрөҫ икәненә тиҫтәләгән-йөҙләгән тапҡыр шаһит булырға тура килде...

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, милли хәрәкәттең иң ҡыҙыу осоронда, ырыуҙар йыйыны ойошторола башланы. Тамъяндар Әбйәлил, Белорет райондары биләмәһендә күпләп йәшәү сәбәпле, ырыу йыйынын Магнитогорск ҡалаһында үткәрергә ҡарар ителде. Беҙ, Ҡотош урта мәктәбе директоры Әшрәф Хужәхмәтов, Сулпан ағай Иманғолов, ошо юлдар авторы, Иҙел-Нөгөш тамъяндары вәкилдәре булараҡ, Магнитогорскиға барҙыҡ. Йыйын уңышлы уҙҙы, күтәренке кәйеф менән ҡайтырға сыҡтыҡ. Әшрәф Ғәзиз улы автобусҡа юлланды. Сулпан ағай менән мин Сибай - Өфө поезына билет алдыҡ. Тейешле сәғәттә Магнитогорск тимер юл вокзалына поезд килеп туҡтаны. Вагонға инәбеҙ. Үтеп барған поезға билет һатҡанда, ғәҙәттә, урының күрһәтмәйҙәр, ҡайҙа буш булһа, шунда ултыраһың. Купеға үтәбеҙ. Аҫтағы урындарҙың береһендә 28-29 йәшлек рус ҡатыны ята, икенсеһен 7 йәштәр самаһындағы ҡыҙы биләгән. Сулпан ағай: "Ҡыҙыңды үҙ яныңа һал әле", - тиеүгә, әсәһе: "Беҙҙең билеттарға ошо урындар күрһәтелгән, оҡшамаһа, ана өҫтәге урынға ят", - тине. Ошоно ғына көткәндәй, юлдашым: "Ярар, беҙгә барыбер төнө буйы йоҡламаҫҡа", - тине лә әйберҙәрен өҫкө ҡатҡа һалды. Ҡатын, аптырап, ни өсөн йоҡламауыбыҙ менән ҡыҙыҡһынды. "Күптән, бик күптән тыуған яҡта булманыҡ, йоҡо ҡайғыһымы ни?" - тип яуапланы Сулпан ағай. "Улай оҙаҡ ваҡыт ҡайҙа йөрөнөгөҙ?"- тип төпсөнгәнгә: "Бынан әллә ни алыҫ түгел урындарҙа урман ҡырҡтыҡ", - тине ағайым. Ҡатын ҡурҡып китте, ниндәй сәбәп арҡаһында "ултырып сығыуыбыҙ" менән ҡыҙыҡһынды. Сулпан ағай уйлап та тормай: "Мин кеше үлтергән өсөн - 9 йыл, ҡусты көсләгән өсөн 10 йыл ултырҙы",- тине. Һөйләшеү шуның менән тамамланды. Вагондың икенсе осонда башҡортса йырлағанды ишеткәс, әйберҙәрҙе ҡалдырып, шунда юлландыҡ. Сибай педагогия училищеһы ҡыҙҙары Өфөгә китеп бара икән. Беҙҙе матур итеп ҡаршы алдылар, хөрмәтләп ҡунаҡ иттеләр. Поезд Белоретты уҙғас, юлдаштарыма хәйерле төн теләп, купеға юлландым, өҫкө урындарҙың береһенә күтәрелдем, шунда уҡ йоҡлап та киттем...

"Әмиров, Ҡарлыманға етәбеҙ", - тигәнгә уянып киттем. Сулпан ағай кейенеп, төшөргә әҙерләнгәйне лә инде. Тегә ҡатын да әйберҙәрен барлай башланы. Өс ҙур сумкаға колбаса тултырып алған (Стәрлетамаҡта йәшәгән ҡатындың әсәһе Сибай ит комбинаты баш бухгалтеры икән, ҡунаҡтан ҡайтышлай "күстәнәс" алған булып сыҡты). Ул да Ҡарлыманда төшөргә тейеш икән. Әйберҙәрен тамбурға ташый башланы был. Бер ҡулы менән ҡыҙын етәкләгән, икенсеһендә ҙур-ҙур сумкалар. Ҡулынан ҡыҙын ысҡындырмай - тегеләй барһа ла, былай килһә лә етәкләп йөрөй. Әйберҙәренә беҙҙе ҡағылдырмай. Ҡарап торһаң, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та. Поезд туҡталғас та беҙҙең яҡтан баш тартты, сумкаларын үҙе генә төшөрҙө. Станция бинаһына ингәс, әйберҙәрен бер мөйөшкә өйөп, ҡыҙын ҡосаҡлап, сумкалары араһына барып ултырҙы. Беҙҙең менән һөйләшмәй.

Бына залда милиционер пәйҙә булды, мәрйәгә йөн инде, беҙгә тантаналы ҡарап ҡуйҙы. Шул саҡ Сулпан ағай был "уйынды" тамамлап, кеҫәһенән Башҡортостан радиоһы хәбәрсеһе танытмаһын сығарып, ҡатынға күрһәтте. Ҡатындың ағарынған йөҙөнә алһыулыҡ ҡунды, йылмайып ебәрҙе.

- Юлдашың да хәбәрсеме?- тип минә ымланы.

- Юҡ, ул заводта инженер,- булды яуап.

- Ә һеҙ төрмәнән ҡайтып килмәйһегеҙме ни?- тине ҡатын тағы ла нығырап аптырап.

- Юҡ. Беҙ Магнитогорскиҙан йыйындан ҡайтып киләбеҙ, - тинем мин

- Ә мин төнө буйы йоҡламаным, үҙем өсөн түгел, ҡыҙым өсөн ҡурҡтым, йә үлтереп, йә көсләп ҡуймаһалар ярар ине, тип ҡурҡып яттым, - тине ҡатын. Шул саҡ Сулпан ағай:

- Беҙҙең менән баштан уҡ әҙәмсә һөйләшһәң, йоҡоң да бөтөр ине, әйберҙәреңдә лә ташышыр инек, - тип төрттөрҙө.

Һөйләшеү артабан дуҫтарса дауам итте. "Һеҙ минә ғүмерлек һабаҡ бирҙегеҙ", - тип, ҡунаҡҡа саҡырып, ҡатын Стәрлелә төшөп ҡалды.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**

ӘЙТӘГҮР!

# ИР-ЕГЕТТӘР...

## һаулығын һаҡлаймы?



**Ғәҙәттә, беҙ ир-егеттәрҙе ил һаҡсыһы, көсһөҙҙәрҙе яҡлаусы, ҡатын-ҡыҙҙың һәм ғаиләһенең терәге тип күҙ алдына килтерәбеҙ һәм шулай тип уйлайбыҙ. Улар батыр, ҡыйыу, көслө булырға тейеш. Ғәмәлдә, ир-аттарыбыҙ үҙҙәренең сәләмәтлеген һаҡлаймы, организмын тыңлаймы, уға ниндәй мөнәсәбәттә? Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан уларға шундай һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

***Адик ШӘЙӘХМӘТОВ:*** Мин ир-атты ике төркөмгә бүләм: ҡаланыҡылыр һәм ауылдыҡылар. Ауыл ир-атының үҙ сәләмәтлеге тураһында уйларға ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ, ул тыуғандан алып ат кеүек эшләй: ҡышын өшөп-туңа - утын яра, көн һайын ҡар көрәй, һыу ташый, мал ҡарай, йәйен эҫелә янып-бешә: бакса утай, күмә, бесән әҙерләй, ҡыҫҡаһы, физик яҡтан көслө һәм сыҙам ир, уға тормоштағы үҙгәрештәр ҙә проблема түгел. Телеғәндә кире ғәҙәттәренән дә тиҙерәк арына. Ҡала балаһының организмын бала саҡтан уҡ төрлө дарыуҙар менән тултыралар. Ул бер нәмәгә лә яраҡлашмаған, әммә организмының кислота-һелте балансын ентекле күҙәтеп тора. Үҙен фитнес-үҙәктәргә йәки аноним эскеселәр йәмғиәтенә йөрөргә мәжбүр итә. Тәбиғәт үҙе ауыл ир-атын сәләмәт итеп яралта, сөнки тап ҡала кешеһе уның арҡаһында йәшәй, үҙ сәләмәтлеген ҡайғырта, ваҡытынан алда вафат булып ҡуймайым тип ҡайғыра.

***Ғәзиз ЙОСОПОВ:*** Ҙур ҡәлгә меңләгән бәләкәй кирбестән торған һымаҡ, беҙҙең һау-сәләмәт тормошобоҙ ҙа меңләгән бәләкәй эштәрҙән тора. Атай кеше булараҡ, мин тәү сиратта үҙемдең һау-сәләмәт булыуыма иғтибар итәм, сөнки мин - ғаиләнең таянысы. Атайым ҡасандыр мине төрлө секцияларға алып йөрөткән һымаҡ, мин дә балаларҙы спортҡа ылыҡтырырға, тәү сиратта - үҙем өлгө булырға тырышам, әлбиттә. Балалар бәләкәй сакта иртәнге йәки киске күнекмәләремдә ген күреп, күҙәтеп торҙо. Улар менән "Тренер" уйынын уйнап сығарҙыҡ. Түңәрәккә торабыҙ ҙа, һәр беребеҙ тренер булып, икешәр-өсәр күнегеү күрһәтә, башҡалар ҡабатлай. Шулай бала саҡтан уйын ярҙамында һаулыҡҡа иғтибар итеү һабаҡтарын бирергә тырыштым.

Үҙем 10 йылдан ашыу йога менән шөғөлләнәм. Ҡала балаһы булһам да, мәктәптә уҡығанда йөҙөү секцияһына йөрөргә күрә һаулығыма зарланманым. Бер мәл карате секцияһына йөрөнөм, шунан йүгерә башланым. Аҙнаһына өс көн йүгерә торғайным. Былтыр пандемия был режимды боҙҙо, хәҙер ҡабат рәткә индерәм. Иң мөһиме, әлбиттә, йога ла, секция ла, йүгереү ҙә түгел. Иң мөһиме - режим һәм уны үтәп барыу. Икенсе мөһим мәл - таҙалыҡ. Тән һәм торған мөхит таҙалығынан башлап, рухи яҡтан таҙарыныуға ла әһәмиәт бирергә кәрәк. Душ, теш таҙартыу, кейемдәреңде, өйөңдә эш урыныңды тәртиптә тотоу - был тышҡы элементтар. Рухи таҙалыҡты һаҡлар өсөн дә төрлө техникалар бар. Әйтәйек, Мифтахетдин Аҡмулла мөнәжәттәре йәки билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе Риза Фәхретдин яҙған "Нәсихәттәр" ҙә бының раҫлай.

***Вәкил ШАМИЛЕВ:*** Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙ сәләмәтлегемә... төкөрәп ҡарайым, тиергә була. Типик ир-ат буламмы икән, әллә киреһенсәме? Үҙемдең сирҙәремде лә, ниндәй ағзам борсоғанын да беләм, әммә барыбер поликлиникаға бармайым һәм шунан ыҙаланам. Табипҡа барһам да, ул минә тәғәйен дарыуҙар, дауаланыу курсы яҙып бирә, уларҙы бер ни тиклем ҡабул иткәндән һуң хәлем еңеләйһә, артабан дауаланыуҙы ташлайым да ҡуям...

***Айҙар НОҒАМАНОВ:*** Йәш үткән һайын һаулыҡты нығыраҡ ҡайғырта башлайһың икән. Мәҫәлән, быға тиклем иғтибар бирмәһәм дә, хәҙер иртән торғас, һыу эсеү ғәҙәткә керҙе. Шулай уҡ фильтрҙан таҙартылған һыуҙы көн оҙоно ашар алдынан ярты сәғәт алдан эсә башланым. Витаминлы, файҙалы аҙыҡ, йәшелсә-емеш менән туҡланыу, саф һауала йөрөүгә иғтибар бирәм. Айырым бер спорт төрө менән шөғөлләнмәйем, әммә иртәнсәк физик күнекмәләр эшләп алам. Яман ғәҙәттәр менән мауыҡмайым. Сәләмәтлекте йәштән ҡайғыртыу мөһим, тигән фекерҙәмен.

***Самат САФИН:*** Хәҙерге йәштәр нисектер, әйтә алмайым, әммә беҙ сәләмәтлеккә артыҡ иғтибар биреп барманыҡ, шулай ҙа ныҡ булдыҡ. Быға, моғайын, ауыл балаһы булыуыбыҙ ярҙам иткәндер. Олоғайғас, сәләмәтлек үҙен һиҙҙерә башлай һәм уға ярҙам итеү тураһында уйланаһың. Мин үҙем йәштән дауахананың ни икәнен дә белмәнем, дарыуҙар менән дә бик дуҫ булманым. Шуға хәҙер ҙә хәлторошто дарыуҙарға алып барып еткермәҫкә тырышам, төрлө профилактик саралар ҡулланам, биологик актив өҫтәмәләргә өҫтөнлөк бирәм. Һәр көн кисен, ниндәй генә һауа торошо булыуға ҡарамаҫтан, биш километр йәйәү йөрөп килеүҙе үҙемә ғәҙәт итеп алғанмын. Инде хәҙер һиҙеҙенсе тиҫтәнең ҡойроғона баҫһам да, берәү ҙә минә үҙ йәшемдә бирмәй.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺҮРӘТЕНӘ ҠАРА ЛА...

■ Лондонда үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, баланың һүрәтенә ҡарап, унын үҫмер саҡта интеллектуаль һәләтенең кимәле нисек буласағын билдәләп була. Британия психологтары 15 мең игеҙәкте тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. 4 йәшлек саҡтарында улар кеше һүрәтен төшөрә. Ғалимдар балаларҙың ижадын 12 баллы система менән баһалай. Бынан тыш, балалар интеллект коэффициентына тест үтә. 10 йылдан һуң яңынан үткәрелгән тест һөрәттәр менән 14 йәштәге тест араһында бәйләнеш барлығын асыҡлай. Шулай ҙа ата-әсәләргә баланың һүрәтте насар төшөрөүенә көйәләнергә ярамай. Интеллектка күп кенә генетик һәм экологик факторҙар йоғонто яһай. Ә холоҡ үҫешенең нигеҙендә темперамент ята.

■ Бөгөнгө заман биология фәненең иң модалы темаһының береһе - эсәк бактериялары. Улар иммунитетка ла, кәйефкә лә, ауырлыҡ массаһына ла йоғонто яһай. Франция менән Эстония тикшеренеүселәре бактерияларға бәйле тағы бер ҡыҙыҡ асыш яһаған. Аппетитты меланотропин гормоны яйлай. Уны икенсе төрлө "туйыу гормоны" тип йөрөтәләр. Эсәк бактериялары ошо гормонға оҡшаған аҡһым бүлеп сығарырға һәләтле. Иммун системаһы уны сит матдә икәнен танып, уға ҡаршы көрәшә башлай, шул саҡта ысын меланотропин да зыян күрә. Был кешенең туҡланыуына нисек йоғонто яһауын асыҡларға тырышып, ғалимдар ҡомаҡтарҙа һынауҙар үткәрә. Эсәктәрендә бындай бактериялар булған ҡомаҡтар башҡа төркөмдәге ҡомаҡтарға ҡарағанда ауырлыктарын нык юғалтҡан, йышыраҡ ашаған. Кешеләрҙә үткән һынауҙар күрһәтеүенсә, кешенең аппетиты ни тиклем боҙолған булһа, унын ҡанында иммунитет сит аҡһымға ҡаршы бүлеп сығарған антиматдәләр ҙә күберәк табылған. Иң ҡыҙығы, был эффект күп ашап та туймаусыларҙа ла, ашай алмаусыларҙа ла күҙәтелгән. Әгәр ҙә бактерия бүлеп сығарған аҡһым бындай етди сирҙәргә килтерә икән, уны ҡанға анализ тапшырып белеп буласаҡ. Югиһә, быға тиклем бындай тайпылыштарҙы психологтар ғына дауалай ала, тип иҫәпләйҙәр ине.

■ PLOS ONE журналы яҙыуынса, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙарҙың хис-тойғоларын аңлауы нык ҡыйын. Индиана университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, гүзәл заттың йылмайыуын да ир-егет дөрөҫ аңламай. Һынауҙарҙа 21 йәштән 52 йәшкә тиклемгә 22 ир-егет ҡатнашҡан, улар магнит-резонанс томография ярҙамында тест үткән. Был ысул мейенең әүҙемлеген билдәләргә мөмкинлек бирә. Уларға күҙҙәр төшөрөлгән һүрәттәрҙе ҡарап, уларҙа ниндәй тойғолар сағылыуын белергә кәрәк булған. Фотоларҙа кеше хис-тойғоларының бөтөн спектры - ынғайы ла, киреһе лә сағылған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙың тойғоһон аңлар өсөн күп ваҡыт кәрәк. Етмәһә, фотола ир-егеттең күҙҙәре һүрәтләнгән саҡта уларҙың баш мейеһенең хистәр менән бәйле өлөшө әүҙемләшеп киткән. Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың күҙенә ҡарағанда баш мейеһенең хис-тойғолар һәм ҡылыҡтар менән бәйле өлөшө нык әүҙемләшмәгән. Ғалимдар билдәләүенсә, ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларын насар "уҡый", етмәһә, улар үҙ затынан булғандарҙың тойғоларына мәрхәмәтлерәк икән.

АЙЫҠ АУЫЛ - 2021

**Тарих ике мең дә туғыҙынсы йылда Өфө эргәһендә ауылдар ҡалҡып сыға башланы. Иң беренсе булып Өфө районы территорияһында XIX быуатта нигеҙ һалынып, бер урамдан ғына торған Шамонин ауылында әүҙем төҙөлөш эштәре башланды. Хатта бер ниндәй уңайлыҡтары булмаһа ла, ошо ҡышты уҡ ятаҡ тормошонан ялҡып, үҙҙәренең иркен мөйөшө булыуға ҡыуанған ғаиләләр өй туйланы. Икенсе йылына инде өй туйлауҙар һаны ла артты, яйлап ауылға йән инә башланы. Бөгөн Шамонин - өс мендән ашыу әүҙем, дәртле, төрлө милләт вәкиле йәшәгән ҙур ауыл. Унда дөйөм белем биреү мәктәбе, поликлиника, ике балалар баҡсаһы бар. Ауылға ингән ерҙә үк күкрәк кереп әле халыктан йыйылған аҡсаға һалына башлаған, шуға ла төҙөлөшө яйыраҡ барған мәсет ҡаршы ала. Башланған эш - бөткән эш, тигән кеүек, Алла бойорһа, тиҙҙән ул да ишектәрен асыр.**

# ШАМОНИНДАР ЕҢЕҮГӘ ЫНТЫЛА!








Яңы ергә ерегеп, йорт-ҡаралтыһын бер аҙ бөтәйткәс, йәштәр тағы ла бәпес алып ҡайтырға ашыкты, ә ололар иһә уларға өгөт-нәсихәттәрен биреп, үҙҙәренең холоҡ-фиғеле менән өлгө булырға тырышты, яйлап ауыл халҡы бер күскә туплана, төрлө саралар ойоштора, үҙҙәрен һынап ҡарай һәм көсөн күрһәтә башланы. Хатта 2011 йылда республикала барлыҡҡа килгән "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәтен, һуңынан "Айыҡ ауыл" конкурсын башлаусылар ҙа Шамонин ауылы егеттәре булды. Бер ни тиклем өҙөклөк кисерһә лә, был конкурс бөгөн яңы һулыш алды һәм тотош республикаға таралды, шул иҫәптән ун йылдан һуң тағы ла Шамонин еренә урап ҡайтты. Эйе, идея барлыҡҡа килгәндән һуң тап 10 йыл үткәс, ауыл республика конкурсында ҡатнашты.

Бында әлегә мәҙәниәт йорто булмағанлыктан, был миссияны мәктәп үтәй һәм ниндәй генә сара булмаһын, һәр саҡ ҡолас йәйеп ҡаршы ала, бер ынғай балалар күңеленә лә орлоҡ һала. "Айыҡ ауыл" конкурсының күрһәтмә сығышы 13 февралдә үтте. Сараны баһаларға килеүсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытколова, БДБҠ Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов, БДБҠ Башҡарма комитеты ағзаһы Сынтимер Баязитов һәм Өфө районы хакимиәте башлыҡы Вилорий Уграовты боронғоса итеп ауыл "ҡапҡаһы" янында егеүле аттарҙа ҡаршы алдылар. Мәртәбәле ҡунаҡтарға "тимер ат"тарын ҡалдырып, егеүле саналарға һәм тарантастарға күсеп ултырырға тура килде. Ул ғына ла түгел, ауыл урамдары буйлап аттарҙа елдереп, йәш ғаиләләрҙең тормош-көнкүреше менән таныштырҙылар, сөнки мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапкыр үҙ күҙең менән күреүең яҡшыраҡ. Әйткәндәй, БДБҠ Башҡарма комитеты бер ынғай ирекмәндәр ролен дә башҡарҙы - күптән түгел генә янып, йортһоҙ ҡалған Ҡәҙермаевтар ғаиләһенә ярҙам йөҙәнән бүләк тапшырҙы.

Ә был ваҡытта мәктәп ихатаһында саҙа ғына түгел, уйын-көлкө, йыр-моң гөрләп торҙо, мәктәп бинаһы эсендә төрлө күргәҙмәләр эшләнә, һәр кем күңеленә хуш килгән шөғөл менән мәж килде. Хөрмәтле ҡунаҡтар сәхнә эргәһенә килеп еткәнсе спортсылар үҙ һөнәрен күрһәтә башланы - быға аптырайны ла түгел, сөнки ошо йылдар эсендә Шамонин спортсылары барлыҡ төрҙәр буйынса ла призлы урындар яулап, үҙҙәрен лайыҡлы дәғүәсе итеп танытып өлгөрҙө лә инде. Ә "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә Сәләмәтлек фестивале тип аталған сарала күрһәтмә сығыштар менән бер рәттән, ғаилә командаларының көс һынашыуы ла спорт менән айырым кешеләр генә түгел, тотош ғаиләләр дуҫ булыуын раҫланы.

Мәртәбәле ҡунаҡтарға сәхнә эргәһенә ҡул һуҙымы ғына араны бик оҙаҡ үтергә тура килде - аҙым һайын туктап китмәй сара юҡ, ул яҡта ла, был яҡта ла балаларҙың шат тауышы, ата-әсәләрҙең уларҙы дәртләндергән тауыштары яңғырай! Ә сәхнә янында республика "Байыҡ" балалар бейеү конкурсы еңеүсеһе, йыл һайын баш ҡаланың Балалар филармонияһы сәхнәһен шаулатҡан "Дарман" балалар бейеү ансамбленең йәш мөргән уксылары оҫталығын күрһәтте. Сер итеп кенә әйткәндә, әгәр етәксен, тренерын, әйҙәүсен Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә эшләгән, ул ғына ла түгел, үҙе үк мәргән уксы, халҡыбыҙҙың боронғо кейемдәрен тергеҙеү менән шөғөлләнгән Роберт Хәмиҙуллин икән - ошо территорияла йәшәгән барлыҡ балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең уҡ атып, сәхнә һөлкетеп бейемәй сараһы юҡ. Хәйер, Шамонин - ул зыялы (уҡытыусылар, тәрбиәселәр, журналистар, яҙыусылар, артистар, табиптар һ.б) ғына түгел, дәртле йәштәр һәм дәртле оло-лар ауылы. Шуға ла "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә сәхнәләштерелгән туй йолаһы үҙе бер кескәй генә спектаклгә әүерелде: унда йәштәрҙең яныпкөйөүе лә, мөхәббәттәрен белдерә алмай ғазапланыуҙары ла, бер-береһен күңелдәре менән аңлауы ла, йәрәктәрҙең ҡауышыуы ла, боронғо йола буйынса килен төшөрөү ҙә, еңгә бүләктәре таратыу ҙа, киленгә һыу юлы күрһәтеү ҙә сағылыш тапты. Ғәмәлдә лә башҡорт йәштәре, атай-олатайҙар йолаларына тоғро ҡалып, айыҡ туй - никахты һайлай. Яңы ғаилә никахтан башлана. Шуға ла ул изге ғәмәлдәрҙең береһе булып тора. Ә инде ошо көндәрҙә никахтарын үткәргән йәш ғаилә Сафроновтар менән алтын туйҙарын билдәләгән Иҙрисовтар ғаиләһенә Рус Юрмашы ауыл биләмәһе советы башлығы Артем Тимониндың бүләктәр тапшырыуы ғаилә ҡиммәттәренең һаҡланыуына һәм һаҡланасағына ишара булды.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айыткoлова байрам менән тәбрикләп, "Айыҡ ауыл" проектының бөгөн ауыл халҡын берләштереүсе, бар халыкты

***✓ Конкурстың критерийҙарына килгәндә, унда демография күрһәткесе ҙур әһәмиәткә эйә. Был йәһәттән Шамонин менән ярышырлыҡ ауыл юҡ, сөнки бында, беренсенән, йәштәр күп, икенсенән, улар күп балалы ғаиләләр.***









*Мул өҫтәлдә ағинәйҙәр ҡунаҡтарҙы һыйланы.*



*Донъя чемпиондары А. Шәйбәков һәм Айгөл Иҙрисова балаларға оҫталыҡ дәресе күрһәтте.*

бергә туплаусы, йәшәү рәүешен ҡайтанан ҡарарға мәжбүр итеүсе сара булыуын билдәләне. Уның әйтеүенсә, ҡатнашыусылар дүрт категорияға бүленгән: бәләкәй - халҡы 200 кешенән кәмерәк ауылдар; 200-1000 кеше йәшәгән ауылдар; 1000-3000 кеше йәшәгән ауылдар; 3000 кешенән күберәк халыҡ йәшәгән ауылдар. Шамонин тап иң ҙур ауылдар категорияһына инә лә инде. "Сер итеп кенә әйткәндә, дүртенсе категорияла дәғүәселек бик ҙур түгел, - тине Эльвира Айытҡолова - иң ҙур дәғүәселек 200-1000 кеше йәшәгән ауылдар араһында".

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы етәкселәре байрамға буш ҡул менән килмәгән, улар йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашыусыларҙы бүләкләне. Ҡоролтайҙың "Ал да сәс нур халҡыңа" миҙалына башҡорт халҡының йолаларын, телен, мәҙәниәтен, рухиәтен һаҡлауға, "Айыҡ ауыл" конкурсын әҙерләп үткәреүгә индергән өлөшө өсөн Шамонин ауылының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәйфә Вәлиева лайыҡ булды, Рәхмәт хаты менән әүҙем йәмәғәт эшмәкәрҙәре Роберт Хәмиҙуллин, Рәйфә Вәлиева, Наилә Сәфәрғолова, Гөлгөнә Минлеханова, Лилиә Барлыбаева, Светлана Дәүләтбаева, Өфө районы хакимиәте башлығы Вилорий Угаров, Рус Юрмашы ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Артем Тимонин бүләкләнде.

Яуап һүҙендә Вилорий Петрович конкурс һөҙөмтәләренең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, бындағы халыҡтың алкоголь эсемлектәрен ҡулланмаҫын белдерҙе, сөнки халыҡтың спорт менән әүҙем шөғөлләнеүе хәҙер инде береһенә лә сер түгел һәм бында татыулыҡ, тыныслыҡ, мөхәббәт һәм ыңғай мөхит хакимлыҡ итә.

Мәртәбәле ҡунаҡтар мәктәп бинаһында ауыл оҫталарының ҡуҙ яуын алырлыҡ ҡул эштәренән ойошторолған күргәҙмәһе менән танышты, шашка буйынса донъя чемпиондары Айнур Шәйбәков менән Айгөл Иҙрисованың уҡыусылар менән бер үк ваҡыттағы сеанс үткәреүен ҡараны, ҡыҙҙарҙың бәйләү, кейеҙ баҫыу серҙәренә төшөнөүен күҙәтте, агинәйҙәрҙең сығышын тамаша ҡылды, улар әҙерләгән ризыҡтан ауыҙ итте. Ә урамда халыҡты мәктәп уҡыусыларының "Дарман" бейеү ансамбле, республика һәм Рәсәй конкурстары лауреаттарынан алып атҡаҙанған исемдәренә эйә билдәле сәхнә йондоҙҙары сығыш яһап ҡыуандырҙы. Эйе, Шамониндың үҙенсәлеге лә шунда - ойоштороусы, сығыш яһаусы, йырсы-ҡурайсы-бейеүсе, гәзит-журналға яҙыусы эҙләп йөрөйһө түгел - барыһы ла күрше, барыһы ла ауылдаш, барыһы ла бер туғандай. Ә уңыш һәм еңеү берҙәмдәргә йылмайыусан.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Ғәлим ЯҠУПОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:*** Быйыл "Айыҡ ауыл" конкурсының төп үҙенсәлеге шунда - унда республика буйынса дөйөм алғанда ике меңдән ашыу ауыл ҡатнаша. Быны беҙ ҙур еңеү тип ҡабул итәбеҙ, сөнки йылдан-йыл күберәк кеше спиртлы эсемлектәрһеҙ ҙә байрам итеп була икәнлегенә өйрәнә. Шулай уҡ быйыл Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың бүләкләү фондын һиҙелерлек арттырыуы ла - 40 миллион һум - күрәш сәмен арттыра, дәртләндерә. Йомғаҡ мартта яһаласаҡ, тәү сиратта, әлбиттә, ауылдың демографик хәл-торошона, демографик күрһәткестәргә иғтибар биреләсәк. Сөнки алкоголь ҡулланыуҙан баш тартыу икенсе фазаға алып сыға - тыуым арта, суицидтар һаны, алкоголь һатыу нөктәләре кәмей. Шулай уҡ йомғаҡ яһағанда башҡа критерийҙарға ла иғтибар биреләсәк: сәләмәт тормош алып барыу, интернет селтәрендә сәләмәт тормош образын пропагандалау һ.б. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау, Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау һәм башҡа министрлыҡтар, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ингән ведомство-ара комиссия положение буйынса раҫланған критерийҙар нигеҙендә йомғаҡ яһаясаҡ. Шамониноның еңеүгә ышаныс ҙур, сөнки бында демографик йәһәттән күрһәткестәр бик юғары. Бөгөнгө байрам да алкоголһеҙ ҙә матур байрам итеп була икәнлеген күрһәтә.

***Эльвира АЙЫТҠОЛОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары:*** Әлбиттә, һәр райондың, һәр ауылдың үҙенә генә хас үҙенсәлеге бар. Быйыл шул тиклем әүҙем ҡатнашалар һәм комиссия агзаларын алда ниндәй ауыр эш көткәнен күҙаллайым, сөнки һәр ҡатнашыусы бик ныҡ тырыша, һәләттәрен генә түгел, айыҡ тормошто нисек алып барырға мөмкин икәнен, әскелеккә ниндәй альтернатива бар икәнен күрһәтәләр. Шамонинға килгәндә, уны республиканың кесерәйтелгән күсермәһе тип әйтергә була - бында республиканың төрлө районДарынан килгән, төрлө милләт, төрлө дин вәкилдәре йәшәй. Байрам ваҡытында ла уның күп милләтле, төрлө конфессиялы икәне, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә төрлө халыҡтың бергә тупланыу тәжрибәһе күренде һәм ҡыҙыҡлы мөхит хөкөм һөрә, сөнки яңы ғына килеп йәшәй башлаған, барыһын да юҡтан, үҙенә башларға кәрәк. Әлбиттә, һәр кем үҙенең тыуған ягы йолаларын иҫләй, белә, әммә уларҙы бергә туплап, берләштереү өсөн дә һәләт талап ителә.

Конкурстың критерийҙарына килгәндә, унда демография күрһәткесе ҙур әһәмиәткә эйә. Был йәһәттән Шамонин менән ярышырлыҡ ауыл юҡ, тип уйлайым, сөнки бында, беренсенән, йәштәр күп, икенсенән, улар күп балалы ғаиләләр. Шуға ошо критерий буйынса Шамонин ауылы алға сығыр тип ышанам. Йәштәр ауылы булһа ла, йәштәр күнел асырға ярата тиһәләр ҙә, бөгөн күп ғаиләләр килгән һәм улар айыҡ тормош алып барырға әҙерҙәр, тип уйлайым. Беҙгә "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә сауҙа нөктәләрендә алкоголь продукцияһын һатыу ысынлап та туҡталғанмы икәнен тикшереү өсөн рейдтар ҙа кәрәк. Был да конкурс критерийына инә. Әлбиттә, "Пятерочка" һымаҡ ҙур магазиндарҙы бер нисек тә тыйып булмай, улар федераль йүнәлештә эшләй. Ә бына бәләкәй магазиндарҙы, кибеттәрҙе контролгә алырға мөмкинлек бар һәм уны эшләргә кәрәк.

Ғөмүмән, былтырғы еңеүселәргә ҡарап ниндәй һығымта яһарға мөмкин: ҡайҙа берҙәмлек - еңеү шунда. Берҙәм халыҡты кемдер артынан этеп, һөйрәп йөрөтмәй, улар ошондай саралар ҙа үҙҙәре теләп ҡатнаша, хакимиәт ягынан да яҡлау таба, дин әһелдәре лә уларға терәк була. Шундай берҙәмлек булғанда еңеүгә өмөт күпкә юғарыраҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# МӨХӘББӘТТЕҢ ЫҢҒАЙ КӨСӨ

Мөхәббәт кешене бөйөк ҡаҙаныштарға, романдар, йырҙар, сәнғәт әҫәрҙәре ижад итеүгә рухландыра. Мөхәббәт хатта тарихҡа ла йоғонто яһай. Мөхәббәт - ул кешелекте бер бөтөн итеп берләштереүсе еп. Мөхәббәттең билдәләмәләре бик күп, әлбиттә, ләкин уларҙың береһе лә уны тулыһынса асып бирә алмай.

Мөхәббәттең ни икәнен аңлау өсөн уның нимә түгеллеген аңларға кәрәк. Мөхәббәт - ул нәфрәт, көсләү, амбиция йәки ярышыу түгел. Был ғашиҡ булыу ҙа түгел. Ғашиҡ булыу тышҡы һыҙаттарға ғына йүнәлтелә һәм асылда яулап алыу сараһы ғына булып тора, ул шәхси талап менән тыуҙырылған невротик хәл. Шуға күрә был осраҡта маҡсатҡа өлгәшеү һуңынан күңел төшөнкөлөгө менән алмашына.

Невротик ҡатынды алайыҡ.

Ул ирҙең матурлығына ҡарап кейәүгә сыға, ә һуңынан, ул үҙенең тышҡы йөҙө хаҡында ғына ҡайғырта, ти.

Ул ирҙең аҡылына ҡарап кейәүгә сыға, ә һуңынан үҙен аҡылһыҙ итеп тоя һәм уны бөтә нәмәне белгән өсөн ғәйепләй башлай.

Ул ирҙең тыныс һәм иғтибарлы булғаны өсөн тормошҡа сыға, ә һуңынан уны күңелһеҙ һәм ялҡытҡыс тип таба.

Ул аҡсаһына, байлығына ҡарап тормош юлдашы һайлай, һуңынан иренә ҡарата нәфрәт тойоғоһо уяна, сөнки ул үҙ эше тураһында ғына уйлай.

Секс арҡаһында кейәүгә сыҡҡан ҡатын һуңынан иренең башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙың да иғтибарын йәлеп итеүен күрә.

Был исемлекте оҙаҡ дауам итергә мөмкин.

Мөхәббәт - ул секс түгел. Мөхәббәтһеҙ секс һәм сексһыҙ мөхәббәт булыуы мөмкин. Ләкин секс менән мөхәббәт берләшкән осраҡта бер ни менән сағыштырғыһыҙ матур рухи тәжрибә барлыҡҡа килә.

Ә нимә һуң ул мөхәббәт? Мөхәббәт - ул Ғаләмдең ылыҡтырыусы, берләштереүсе, яраштырыусы көсө. Мөхәббәт - ул тәгәйен бер кеше менән, башҡалар менән сағыштырғанда, оҙағыраҡ булыу, уға һәр яҡлап ярҙам итеү теләге. Ләкин, иң элек, мөхәббәт - ул башҡа кешегә үҙ-үҙе булып ҡалыу мөмкинлеге бирергә һәм уның шәхесен нисек бар, шул көйөнсә, үҙгәртергә маташмайынса ҡабул итергә әҙер булыу. Был принцип эшләһән өсөн ул ике яҡтан да күҙәтелергә тейеш. Күп үҙ-ара мөнәсәбәттәр проблемаһы яуапһыҙ мөхәббәткә ҡайтып ҡала.

Мөнәсәбәттәрегеҙ тигеҙ булһын өсөн һин, алмашына ниҙер алырыңа ышанып, бирергә тейешһең. Һинең талаптарың, партнерыңдың талаптары кеүек үк, ҡәнәғәтләндерелергә тейеш. Алмашына ниҙер көтмәйенсә бирергә, йәки бер нәмә лә бирмәйенсә, алырға ғәҙәтләнеү - невротик шәхес билдәһе. "Әгәр...", "...шунсыға тиклем" тип яратып булмай. Саф мөхәббәттә эмоциональ шантаж булмай. Мөхәббәттең көсө ыңғай.

Балала яратыу һәләте, ғәҙәттә, өс йәштә формалаша башлай, шуға күрә баштан уҡ балаға үҙен дөрөҫ баһаларға ярҙам итергә кәрәк. Әгәр ҡыҙ бала үҙен түбән баһалаһа, мөмкинлектәре сикләнгән тип иҫәпләп, тәүге осраған кешегә кейәүгә сыға. Уның буйһоноусан хәлен тойоп, ир үҙен өҫтөн күрергә маташа башлай. Һөҙөмтәлә был айырылышыуға килтерә, йәиһә ир эскесегә, невротикка, психопатҡа әүерелә. Әгәр үҙ-үҙендә ышаныс, үҙең һәм башҡалар менән килешеп йәшәргә ынтылыш бала саҡтан тәрбиәләнһә, бындай ҡорбандар ҙа булмаясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 22 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.55 Т/с "Крепкая броня". [16+]
10.20 Х/ф "Экипаж". [12+]
13.00, 15.20 Т/с "Джульбарс". [12+]
15.00 Новости (с субтитрами).
21.00 Время.
21.20 Х/ф Премьера. "Калашников". [12+]
23.15 Х/ф "Турецкий гамбит". [12+]
1.35 Д/ф "Прерванный полет Гарри Пауэрса". [12+]
2.25 Мужское / Женское. [16+]
3.55 Давай поженимся! [16+]
4.35 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Любовь на четырех колесах". [12+]
7.00 Х/ф "Укрощение свекрови". [12+]
7.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Новый муж". [12+]
15.35 Петросян-шоу. [16+]
18.00 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Новая жизнь Маши Соленовой". [12+]
1.35 Х/ф "Приличная семья сдаст комнату". [12+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]**
**9.00 Автограф. [12+]**
**9.30 Концерт ко дню рождения Айнура Фатихова. [12+]**
**10.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [12+]**
**11.00 "Гора новостей".**
**11.15 "История в граффити". [6+]**
**11.30 Д/ф "Герои среди нас". [0+]**
**12.15 Спектакль "Семь девушек". [12+]**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 "Замандаш". [6+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.30 Юлдаш-хит-2020. [12+]**
**19.00 Творческий вечер, посвященный 65-летию народного артиста БАССР Азата Аиткулова. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Бал джигитов". Финал проекта. [12+]**
**0.15 Х/ф "Помню не помню". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Израненная судьба". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 23 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.00 Т/с "Крепкая броня". [16+]
10.20 Д/ф "В День защитника Отечества. 50 лет фильму "Офицеры". "Судьбы за кадром". [16+]
11.10, 12.15 Д/ф "Василий Лановой". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.30 Д/ф "Георгий Юматов". [16+]
15.30 Д/ф Премьера. "Алина Покровская. Мои "Офицеры". [12+]
16.35 Премьера. Концерт к 50-летию фильма "Офицеры". [12+]
19.15 Х/ф "Офицеры". Легендарное кино в цвете. [6+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. Концерт ко Дню защитника Отечества. [12+]
23.35 Х/ф "Батальон". [12+]
1.50 Д/ф "Прерванный полет Гарри Пауэрса". [12+]
2.40 Мужское / Женское. [16+]
4.05 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

5.15 Х/ф "Ночной гость". [12+]
7.10 Х/ф "Идеальная пара". [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
16.05 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
18.05 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Стрельцов". [6+]
23.10 Х/ф "Экипаж". [12+]
1.55 Х/ф "Охота на пиранью". [16+]

### БСТ

**7.00 "С Днем Защитника Отечества!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Д/ф "Керчь! Конь мой верный, конь мой вороной..." [6+]**
**9.00 "Автограф". [12+]**
**9.30 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**10.15 "Страна Северных Амуров". [6+]**
**10.30 "Станем мы солдатами". Десткий концерт. [0+]**
**11.00 "Гора новостей".**
**11.15 "Тамыр" представляет... [6+]**
**11.30 "Школа героев". [6+]**
**12.15 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**14.00 "С Днем защитников Отечества!" Концерт. [12+]**
**14.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**15.45 Заветное слово наследия. [12+]**
**16.30 Юлдаш-хит-2020. [12+]**
**19.00 Концерт Юрия Шевчука. [12+]**
**21.15 "Пофутболим?" [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.20 Хоккей. "Динамо Р" (Рига) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**1.30 Х/ф "Пушкин: последняя дуэль". [16+]**
**3.15 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 24 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 "101 вопрос взрослому". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.50 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.40 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 Д/с "Люди-легенды". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Гоголь. Ближайший". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**4.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 25 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Курорт цвета хаки". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 На ночь глядя. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
11.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Х/ф "Мороз по коже". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.50 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.40 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь тракториста". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**21.00 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Путешествие из Парижа". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**5.15 Преград. Net. [6+]**

### 26 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.20 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.10 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.05 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Я - Берт Рейнолдс". [16+]
1.35 Вечерний Unplugged. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Невеста комдива". [12+]
0.55 Дом культуры и смеха. [16+]
3.00 Х/ф "Пряники из картошки". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Непобедимая и легендарная. История Красной Армии". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 19.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Д/ф "В жерновах времени". [12+]**
**0.15, 4.45 Х/ф "Новая жизнь Аманды". [16+]**
**2.30 Спектакль "Асылйәр". [12+]**

### 27 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Анне Вески. Горячая эстонская женщина". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 Д/ф "Три плюс два". Версия курортного романа". [12+]
14.50 Х/ф "Три плюс два". К 80-летию Евгения Жарикова. [0+]
16.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.20, 22.00 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
19.40 "Горячий лед". Финал. Кубок России по фигурному катанию. Женщины. Пары. Короткая программа. Прямой эфир из Москвы.
21.00 Время.
21.20 "Горячий лед". Финал. Кубок России по фигурному катанию. Женщины. Пары. Короткая программа. Передача из Москвы. [0+]
23.40 Х/ф Премьера. "Та, которой не было". [16+]
1.35 Вечерний Unplugged. [16+]
2.15 Модный приговор. [6+]
3.05 Давай поженимся! [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Вторая попытка". [12+]
1.05 Х/ф "Училка". [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Локомотив" /Ярославль/ - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры". [12+]**
**0.00, 4.45 Х/ф "Мистер Феличита". [16+]**
**2.30 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**

### 28 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Егерь". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.40 Д/ф "Светлана. Судьба дочери вождя". [12+]
15.25 Премьера. "Я почти знаменит". [12+]
17.10 "Точь-в-точь". Новый сезон. [16+]
19.40 "Горячий лед". Финал. Кубок России по фигурному катанию. Женщины. Пары. Произвольная программа. Прямой эфир из Москвы.
21.00 Время.
21.50 "Горячий лед". Финал. Кубок России по фигурному катанию. Женщины. Пары. Произвольная программа. Передача из Москвы. [0+]
23.00 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.00 Д/с "Их Италия". [16+]
1.40 Вечерний Unplugged. [16+]
2.25 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
3.55 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 1.30 Х/ф "Мама напрокат". [12+]
6.00, 3.20 Х/ф "Молодожены". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Акушерка. Новая жизнь". [12+]
17.45 Ну-ка, все вместе! [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Культура малой Родины. [12+]**
**17.30 Концерт этно-группы "Йатаган". [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Мачо man". [16+]**
**2.00 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**4.30 "Байык" представляет... [12+]**
**5.30 Детей много не бывает. [12+]**

✓ *Статистика буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй. Быға аптырарға түгел: ҡатын-ҡыҙҙар утыҙ йәшкә еткәнсе лә әллә күпме ваҡыт үтә. (Бинг Кросби).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 ФЕВРАЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ТУҒАН ТЕЛ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**6-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Анод. Илһамов. Ҡонан. Ҡауҙы. Тәнре. Ҡолғона. Бейеш. Ләңге. Әйләнә. Төшөм. Тау. Әрәсә. Лайм. Зубр. Ислам. Ир. Иген. Вариант. Әтлек. Ғаязов. Урындыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Бәхтизин. Ҡайбышев. Шаммазов. Игеҙ. Ашығыу. Ыҡ. Әй. Яһаҡ. Төрки. Абазин. Ниғмәтуллин. ГТО. Диван. Уҡ. Тал. Әминә. Әмер. Гипс. Ете. Әрмәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (10) дүшәмбе | 6:54 | 8:24 | 13:30 | 17:06 | 18:36 | 20:06 |
| 23 (11) шишәмбе | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 24 (12) шаршамбы | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 17:10 | 18:40 | 20:10 |
| 25 (13) кесе йома | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 26 (14) йома | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 17:14 | 18:44 | 20:14 |
| 27 (15) шәмбе | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 17:16 | 18:46 | 20:16 |
| 28 (16) йәкшәмбе | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## БАЙРАМ ТАМАШАЛАРЫ

**22 февралдә** көндөҙгө сәғәт 1-ҙә Рус драма театры алдындағы майҙанда байрам уңайынан **"Ватан Геройҙарына бағышлана" open air концерты** башлана. Программала - популяр артистарҙың, Башҡортостан Республикаһының билдәле мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең сығыштары. Байрам ҡунаҡтарын Рәмил Бәҙәмшин, Геннадий Родионов, "Арғымаҡ", Zainetdin show Neo Vision төркөмдәре, шулай уҡ "Йәшлек шоу-2020" Бөтә Рәсәй йәштәр фестивале финалсылары YALFY, RAHIMOV, Илдар Абдуллин, Алиса Йомағәлиева ҡыуандырмаҡсы. Концерттың хедлайнеры - йырсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Денис Майданов.

**23 февралдә** көндөҙгө сәғәт 1-ҙә "Мотор эшләүсе" мәҙәниәт һарайы алдында **Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған ҙур байрам концерты** башлана. Байрам программаһында популяр артистар, танылған мәҙәниәт эшмәкәрҙәре Рәмил Бәҙәмшин, Александр Лынник, "АНТ", "Премьер" төркөмдәре, "Каруан-һарай" фольклор-эстрада төркөмө, Zainetdin show Neo Vision, "Йәшлек шоу-2020" Бөтә Рәсәй йәштәр фестивале финалсылары ҡатнаша. Концертҡа инеү ирекле.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 февраль "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**26 февраль "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**27 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

**28 февраль "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашененников). 12+

**"Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры сәхнәһендә **24 февраль "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00, 12.00 0+

**"Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+

**25 февраль "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 10.00, 12.00 3+

**"Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), үлемһеҙлек хаҡында хикәйәт. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 февраль "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**23 февраль "Маша и медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+

**27 февраль "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**28 февраль "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 февраль "Генерал Хәлит Баяновичта ҡунаҡта"** баян-шоу. 18.00 6+

**26 февраль "Лаунж-концерт"** (Е. Романов). 6+

**27 февраль "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+

**"Беҙҙең ваҡыт"** Т. Рамазанов етәкселегендәге төркөм концерты. 18.00 6+

**28 февраль "Soundtrack от НОНИ"** башҡорт милли музыка ҡоралдарында донъя киноһы хиттары. 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**22 февраль Премьера! "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 12+

**23 февраль "Служили два товарища"** ғаилә өсөн тамаша. 12.00 0+

**26 февраль "Атты ектем! Алға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 12+

**27 февраль "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 12+

**28 февраль "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+

### Сибай театр-концерт берекмәһе

**22 февраль "Батыр ирҙән дан ҡала"** байрам концерты Сибай драма театры залында үтә. 6+

МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ!



# БАЛАҒА ҠУЙЫЛҒАН ТӘҮГЕ ТАЛАП...

**Улдарымдың матур итеп башҡортса һөйләшкәнен ишетһәләр, "Балаларың Баймаҡта уҡыймы?" тип һорайҙар. Әйтерһең дә, Баймаҡта ғына башҡортса һөйләшәләр. Теләк булғанда, Өфөлә лә баланы башҡортса һөйләштереп була ул! Теләк кенә кәрәк. Ә теләк булһын өсөн, моғайын да, милли рух, халҡыңа һөйөү мотлаҡтыр.**

Эйе, мин башҡортса һөйләшәм һәм балаларымдан да шуны талап итәм. Халҡыма, туған телемә булған һөйөүемде улдарым йөрәгенә лә һала алыуым менән ғорурланам. Өлкәне Өфө мәктәптәренең береһендә уҡый, бәләкәсе Өфөләге балалар баҡсаһының рус төркөмөнә йөрөй. Икеһе лә өйҙә башҡортса һөйләшә! Сөнки мин, әсәләре, уларға русса өндәшергә рөхсәт итмәйем. Бер мәл Рамаҙан улым яңылыш ҡына "мама" ти ысҡындырғайны, минең яуап ҡыҫҡа булды: "Ана, урамға сыҡ та маманды эҙләп тап. Өйҙә мама юҡ!"

Бына шулай, талап иткәндә, үҙең дә гел башҡортса аралашҡанда, балаларҙы туған телгә ныҡлап йәлеп итергә мөмкин. Һылтау эҙләү кәрәкмәй һис. Әлбиттә, мин саф башҡортса ғына һөйләшәм тип маҡтана алмайым. Рус теленән ингән һүҙҙәр "зараза" һымаҡ йәбешкән бит инде: "может", "пожалуйста", "привет" һәм башҡалар. Шуларҙы ҡыҫтырһам, улдарым хәҙер мине лә тәнҡитләй: "Ана, әсәй, үҙең дә русса әйттең, хәҙер мөйөшкә баҫаһың инде", - тип көлдөрөп алалар. Шулай... Мин - уларҙан, улар минән талап итә. Улдарыма әйтеп ҡуйғанмын: "Мәктәптә русса һөйләшәһегеҙме, инглизсәме, ҡытайсамы - быныһы һеҙҙең эш, ә өйҙә тик башҡортса!" Ошондай ҡәтғи талап булғанда һәр бер башҡорт ғаиләһендә үҙ телен яҡшы белгән бала үҫәсәк. Зинһар, ситтән һылтау эҙләмәгеҙ! Ваҡыт юҡ, русса йәнһүрәт ҡарай, балалар баҡсаһында рус төркөмөнә йөрөй, рус класында уҡый, интернет боҙҙо - быларҙың барыһы ла һылтау ғына. Һеҙ үҙегеҙ талап итмәйһегеҙ, һеҙ үҙегеҙ балағыҙ менән шөғөлләнмәйһегеҙ, тимәк. Бары үҙегеҙ ғәйепле!

Билдәле шәхестәрҙең, яҙыусы-шағирҙарҙың, башҡорт журналистарының, актер-актрисаларҙың балалары русса һөйләшеүен, башҡортса белмәүен ишетеп шаҡ ҡатам. Хатта башҡорт теле уҡытыусыларының балалары башҡортса һөйләшмәй икәнде лә ишеткәнем бар. Быныһы бер нисек тә башҡа һыймай. Мин, ябай һатыусы тип әйтәйемме, үҙ баламды әсә телендә һөйләштерә алам, ә башҡорт теле уҡытыусыһы үҙ балаһын өйрәтә алмаймы? Оят түгелме? Үҙ балаң һөйләшмәгәс, һинең ошо һөнәреңдән ни файҙа? Һеҙ ин рухлы кеше булырға тейеш түгелме ни?

Башҡорт теле башҡортҡа кәрәк. Һәр башҡорт ғаиләһендәге баланың теле "әсәй", "атай" тип асылырға тейеш. Кемгә кәрәк ул, тимәгеҙ. Беҙгә, үҙебеҙгә кәрәк! Хатта бер ғалим яҙы: баҡтиһәң, суицидҡа барған кешеләрҙең күбеһе үҙ телен белмәй булып сыҡҡан. Артабан нисек дәлилләгәнен иҫләп етмәйем. Әммә милли аң, әсә теле кешенең эске күңелен, аңын, фекерләүен үҫтерә икәненә иманым камил.

Тағы бер миҫал килтерәм, уны ла миңә кемдер һөйләгәйне. Һуғыш мәлендә бер егет мәрйә кәләш алып ҡайта. Балаларына башҡортса исем бирелә бирелеүен, тик улары сҡындырыла. Исем-шәриф кенә башҡортса ҡала. Тәүҙә ир был хәлгә иғтибар итмәй, йәш саҡ бит. Көнө эштә үтә. Олоғайғас, башҡортса йырҙар тыңлап, мәжлестәрҙә башҡортса йырлашып, һөйләшеп ултырғыһы килә башлай. Әммә эргәтирәһендә барыһы ла урыҫ та манҡорт икән... Балалары башҡортса белмәй, ейән-ейәнсәрҙәре иһә сей урыҫ, исемдәре лә Катя ла Иван...Һуңлап ҡына милли аң төшөнсәһен иҫенә төшөргән ветеран бераҙға үкенеп һөйләгән: "Үлһәм, мине, бәлки, туғандарым мосолманса килеп ерләшер ҙә ул, аят уҡытып, доға ҡылдырып торған кеше булмаҫ инде..."

Нимә әйтергә теләйем. Телгә ихтирам бөткән ерҙә, тарихҡа ла, мәҙәниәтҡә лә, ғөрөф-ғәҙәттәргә лә, йолаларға ла хөрмәт бөтә. Һеҙҙөмтәлә, һин ни башҡорт түгел, ни урыҫ түгел, ни инглиз түгел...Кем һин? Бөгөндән ошо һорауҙы үҙегеҙгә бирегеҙ әле.

**Эльвира СОЛТАНҒОЛОВА.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

**Хәсән НАЗАР,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Башҡорт теле! Уралымда
Затым өсөн һин рух түле.
Миңә һин - яҙмыш, ә кемгә -
Сәхнәләгесә роль теле.

Башҡорт теле! Тарихында
Бер кемгә лә юк ләғнәте.
Тик үҙенсә иретмәктә
Көсәнмәне кем ләғәте.

Башҡорт теле! Һин - аҡбуҙат,
Һин - һандуғас, һин - ыласын.
Һәр өнөң ҡурай моңолай,
Барыһы тәбиғи ысын.

Башҡорт теле! Салауат теле,
Һәҙиә теле, Мостай теле.
Уларға бит "Урал батыр "
Иң шөһрәтле остаз ине.

Башҡорт теле! Мәктәптәргә -
Һаман ҡыҫырыҡлау еле.
Донъя тармы? Былай ҙа бит
Вазифалы урыҫ теле.

Башҡорт теле! Быуаттарҙы
Үтеп тә һин, сарланып та,
Яҙҙыртаһың минән шиғыр,
Ғорурланып, зарланып та.

Башҡорт теле! Уралымда
Затым өсөн һин рух түле.
Һин бит беҙҙең хәтер иле,
Мәңге йәшә, башҡорт теле!

**Гәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**

## ТЕЛЕМ ХАҠЫ

Телем, тиеп һүҙ әйтмәһәм,
Мин кем булам?
Телем тиһәм, мин, ҡурайҙай,
Моңға тулам.

Моңға тулам, йырға тулам,
Нурға тулам.
Телем, тиһәм, йырлы-моңло
Ҡояш булам.

Телгенәйем - әсәй кеүек,
Әсәй - бераү.
Әсәйҙәр бит был донъяла
Беҙгә тереү.

Әсәйемдең теле бит ул -
Күңел теле.
Ошо телгә һыя минең
Йөрәк сере.

Әсәй хаҡы - тәңре хаҡы,
Телем хаҡы.
Телем, тиһәм генә минең
Донъям яҡты.

Телем, тиһәм, мин - теремен,
Мин түлләмен.
Телем менән бер бөтөнмөн
Һәм иллемен.

Телем менән генә бармын,
Буласаҡмын!
Телем менән мин яңынан
Тыуасаҡмын!



**Гөлназ ҠОТОЕВА**

## ТЕЛЕМ, МЕҢ ЙӘШӘ!

Туған телем минен, аҫылым,
Балҡып ҡына китер асылым,-
Башҡортсалап бераү өндәшһә,
Бер туғаны кеүек һөйләшә.

Башҡорт теле - тыуған илгенәм,
Иркәләп тә һөйөр елгенәм.
Әсәм ҡулдарының наҙы ул,
Күңелемдең шаулы яҙы ул.

Башҡорт телем минен - сабырлыҡ,
Инәйҙәрҙән ҡалған таһыллыҡ,
Башҡорт теле - минең тамырым,
Селләләрҙә көткән ямғырым.

Башҡорт теле - минең улғынам,
Киләсәккә илтер юлғынам.
Башҡорт теле - минең киләсәк,
Килер быуындарға бирәсәк.

Башҡорт телем минен, аҫылым,
Балҡып ҡына китер асылым,-
Башҡортсалап бераү өндәшһә,
Йөнем ирей.
Телем, мең йәшә!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛ - БАЛА:

## күргәнен теләй

Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен... балаң үҫкәс белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кәрәкһеҙ нәмәләр ғәҙәттә бик ҡыйбат тора.

**(Катон Старший).**

Йәшлек - ул кешенең ахмаҡлыҡ эшләүҙән ҡурҡмаған сағы.

**(Петр Капица).**

Дошмандарығыҙҙы ғәфү итегеҙ, ләкин исемдәрен онотмағыҙ.

**(Джон Кеннеди).**

Буш ваҡыттары күп булған кешеләр ғәҙәттә буш ваҡыттары булмаған кешеләрҙә ваҡыт уҙғара.

**(Рене Клер).**

Ғүмер буйы шундай ахмаҡтар менән аралашып, нисек аҡыллы булып китмәҫкә инде уға?

**(Василий Ключевский).**

Әгәр ҙә кеше уңыштарға ышанмаһа, тимәк, уның тормош тәжрибәһе аҙ.

**(Джозеф Конрад).**

Кешеләр һине белмәгәнгә бошонма, һин кешеләрҙе белмәгәнгә бошон.

**(Конфуций).**

Статистика буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй. Быға аптырарға түгел: ҡатын-ҡыҙҙар утыҙ йәшкә еткәнсе лә әллә күпме ваҡыт үтә.

**(Бинг Кросби).**

Бер ҡасан да уңышһыҙлыҡтарға ҡаршы сыҡма. Тик кенә ултыр һәм ундан туғыҙ уңышһыҙлыҡ һине ары уҙып ҡына китер.

**(Калвин Кулидж).**

Реклама - ул кеше бөтөнләй ишетмәгән, белмәгән тауарҙың тиҙ арала бик тә мөһим, кәрәкле булып китеү ысулы.

**(Мартини Ларни).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡыусы уҡытыусыһынан һорай, ти:**

**- Бәхеттең аҡсала булмауын нисек иҫбатларға?**

**Уҡытыусы, йәйлап ҡына фекер туплап, ошолай яуап биргән:**

**- Быны иҫбатлау бик еңел. Аҡсаға түшәк һатып алып булһа ла, түшәк өҫтөндә күргән төштө һатып алып булмай, йәки дарыу һатып алыу менән һаулыҡ килмәй... Өйҙә һатып алып була, өй йылыһын һатып алып булмай, белем алып, уҡып ҡына шулай уҡ аҡыллы булып китмәҫкә лә мөмкин. Бындай миҫалдар иҡһеҙ-сикһеҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3400
Заказ - 130/02

1 582218 911006 21008